*Нәзир ҠОЛБАХТИН,*
*тарих фәндәре докторы*

# 1773—1775 ЙЫЛДАРҘАҒЫ КРӘҪТИӘНДӘР ҺУҒЫШЫ ЮЛБАШСЫЛАРЫ

## ҠАРАНАЙ МОРАТОВ

Илебеҙ тарихсылары Ҡасҡын Һамаровҡа быға тиклем бер генә тикшереүен дә арнамаған булһа, Ҡаранай Моратов хаҡында бер нисә мәҡәлә яҙылғайны.[1] Башҡорт юлбашсыһына Татарстан тарихсылары ҙур иғтибар йүнәлдергәйне. Тарих фәндәре докторы С.Х.Алишев Минзәлә төбәгенең баш күтәреүселәре етәксеһе Ҡаранайҙың көрәшен киң юҫыҡта һүрәтләне.[2] Авторға бер генә иҫкәрмә яһап була: ул баш күтәреүсе төбәк юлбашсыһының Нуғай даруғаһы Бөрйән олоҫо башҡорто икәнлеген уҡыусыға бер һүҙ менән дә белдермәй. Яр Саллынан журналист Вәхит Имамов та Ҡаранайҙың баш күтәреү эшмәкәрлеге һәм яҙмышы тураһында күп яҙҙы, әммә мәғлүмәттәрҙең буталыуына һәм һығымта яһағанда күп кенә хаталарға юл ҡуйҙы.[3]

Ҡаранайҙың һуғышҡа тиклемге тормош биографияһы бер ни тиклем бәхәстәр тыуҙыра. Бик күп авторҙар (Р.Шәкүр, С.Таймасов, В.Имамов, Ә.Әсфәндиәров), Ҡаранай Моратов бер нисә ғаилә иҫәбендә тыуған ерҙәрен ташлап китергә мәжбүр булған, Крәҫтиәндәр һуғышы алдынан Меркет-Мең олоҫо ерҙәрендә керҙәш (припущенник) хоҡуғында урынлашҡан һәм Ҡаранай ауылын нигеҙләгән, тип раҫлай.[4] Әммә был бәхәсле фекер. Крәҫтиәндәр һуғышы материалдары буйынса ул Бөрйән олоҫоноң йөҙ башы тип атала. XVIII быуаттың 80-се йылдарындағы документтарҙа ла Ҡаранай Бөрйән олоҫо старшинаһы вазифаһын башҡарыусы һәм йөҙ башлығы тип иҫәпләнә.[5] Үҙ олоҫон ташлап киткән кешене артабан да 20—30 йыл буйы шул уҡ олоҫтоң старшинаһы һәм йөҙ башлығы тип иҫәпләүҙәренә ышаныуы ҡыйын. Тарихи әҙәбиәттә, Ҡаранай күренекле Алдар батыр Иҫәкәевтың ейәне булған, тигән фекер ишетелеп ҡалды.[6] Башҡорт халҡының ике арҙаҡлы улының шәжәрәләре киҫешеүе лә ихтимал. Ысынлап та, Алдарҙың Морат исемле улы булған, ул 1735—1740 йылдарҙағы башҡорт ихтилалдарында әүҙем ҡатнашҡан.[7] Алдар — Морат — Ҡаранайҙың йәш нисбәте лә ысынбарлыҡҡа тап килгән кеүек. Был юлдарҙың авторы ла 70—80-се йылдарҙа ошо версияны өйрәнде. Әммә Бөрйән ырыуының

нәҫел ағасында быны раҫлаусы дәлилдәр табылғаны юҡ әле. Был мәсьәләне асыҡлау өсөн тарихсыларҙың, этнографтарҙың, тыуған яҡты өйрәнеүселәрҙең ентекле эҙләнеүҙәре талап ителә.

Ҡаранайҙың 1755 йылғы башҡорт ихтилалында ҡатнашыуы тураһындағы версия ла бәхәсле. С.Таймасов Өршәк-Мең олоҫо старшинаһы Ибраһим Мерәсевтың мишәр старшинаһы Мөксин Әбделсәләмовҡа 1774 йылдың 20 майында яҙған рапортында Ҡаранайҙы «Бөрйән олоҫоноң күптәнге хыянатсыһы һәм яуыздар башлығы» тип атауын быны берҙән-бер дәлиле тип иҫәпләй.[8] Автор файҙаланған документтағы айырым һүҙҙәрҙе аныҡларға кәрәк. Унда «Бөрйән олоҫоноң яуыздар төркөмө башлығы йөҙ башлығы Ҡаранай Моратов»[9] тиелгән. Тимәк, үрҙә килтерелгән версия сығанаҡтарҙа бер ниндәй мәғлүмәттәр менән дә раҫланмай.

1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы башланыуға уның өлкән кеше, өлгөргән шәхес булғанлығы бәхәсһеҙ. Бөтә сығанаҡтарҙа ла ул Бөрйән олоҫоноң йөҙ башлығы тип исемләнә. Әммә беҙгә килеп еткән һуғышҡа тиклемге сығанаҡтарҙа Ҡаранайҙың исеме, Кинйә, Ҡасҡын, Ҡотлогилде, Яманһары һ.б. старшиналарҙан айырмалы рәүештә, ябай башҡорттар араһынан һайлап алынған вәкилдәр араһында осрамай. Һәм һуғыштың тәүге аҙналарында Ҡаранай етәкселәр араһында ла күренмәй. Уның Ҡасҡын октябрҙә баш күтәреүселәр хәрәкәтенә туплаған башҡорттар араһында булыуы ихтимал. Ул артабан да бик оҙаҡ Ҡасҡындың күләгәһендә ҡалғанға оҡшай. Ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, ул Ҡасҡын менән бергә Стәрлетамаҡ пристане һәм Табын аша Өфөгә килгән.

Әммә был версия аҙағынаса ышандырмай. 1773 йылдың декабрь башында Ҡаранай «поход старшинаһы», ә ай аҙағында «армияның баш полковнигы» тип атала.[10] Был мәғлүмәттәр шундай һығымтаға килергә булышлыҡ итә: Ҡаранай Берда лагерына хәрәкәт башында килгән, Кинйәнең башҡорт полкында хеҙмәт иткән, полководец һәләттәрен күрһәтеп, Пугачев алдына баҫҡан, «батша» уға «поход старшинаһы» чинын биреп, төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанға ебәргән. Ҡасҡындың үҙәккә, ә Ҡаранайҙың төньяҡ-көнбайышҡа ебәрелеү ваҡыты һәм улар хәрәкәтенең башланғыс маршруты тура килгән. Шуға Стәрлетамаҡ пристане, Табын ҡәлғәһе һәм Богоявленск заводы аша Өфөгә тиклем улар бергә барған. Ҡасҡын Чесноковка ауылында туҡтаған һәм, Пугачевтың күрһәтмәһе буйынса, Өфө тирәләй баш күтәреүселәр төбәгенә етәкселек итә башлаған, ә Ҡаранай Баҡалы ҡәлғәһе аша Минзәләгә юл тотҡан.

Ҡаранайҙың үҙаллы, дауыллы баш күтәреү эшмәкәрлеге Минзәлә эргәһендә башлана, уның һоҡланғыс фиҙакәр көрәше яҡты йондоҙ булып шунда ҡабына. Ай ярым самаһы ваҡыт эсендә ул ашыҡмай ғына Кинйә менән Ҡасҡын мәктәбен үтә, тәжрибәле хәрби юлбашсы, полководец булып өлгөрә. Минзәләгә килеү менән ул Крәҫтиәндәр һуғышының күренекле етәксеһенә әйләнә. 1773 йылдың декабрь айының тәүге яртыһында уҡ көнбайыш Башҡортостандағы ихтилалсыларҙың ҙур етәк-

селәренең береһе, Ҡазан даруғаһы Надир олоҫоноң яһаҡлы татарҙары старшинаһы Ибраш Уразбахтин Яҡуп ауылы старшинаһына яҙған хатында уны юлбашсы тип таный һәм язалаусылар командаһына ҡаршы дәррәү күтәрелеү өсөн «бөтәһенең дә поход старшинаһы Ҡаранай Моратовҡа килеүен» талап итә.[11]

Баш күтәреүселәр армияһын йыйыу, уны ҡорал, аҙыҡ-түлек һәм мал аҙығы менән тәьмин итеү, ихтилалды Башҡортостандың көнбайыш олоҫтарында йәйелдереү өсөн Ҡаранай күпте эшләй. Ул «батша» Петр өсөнсө — Пугачев байрағы аҫтында төбәктең күп милләтле халҡын социаль һәм милли иҙеүгә ҡаршы көрәшкә күтәрелергә саҡырып, хаттар яҙа һәм Пугачев манифестарын тарата. Үҙенең фармандарының береһендә Ҡаранай язалаусылар командаларының һөжүм итеүсе көстәренә берҙәм ҡаршы тороу өсөн «бар ерҙәге армияларҙың һәм барлыҡ ауылдарҙағы хәрби башлыҡтарҙың» Иҫке Таҙлар ауылында йыйылыуҙарын талап итә.[12]

Ҡаранайҙы үҙҙәренең командиры тип таныусы Нуғай даруғаһы старшиналары, Пугачев полковниктары Ҡыҙрас Муллаҡаев, Ҡәйеп Зыямбәтов, Ишҡар Арыҫланов та Ҡаранай менән бергә Өфө эргәһенән Минзәләгә килә. Урында Мәсәғүт Ғүмәров, Шәфей Тойғужин, Шәрип Яҡупов, Нуғайбәк Әсәнов, Баҡый Абдулов, Йүскәй Ҡудашев, Назар Алексеев, Айыт Уразымбәтовтарҙың баш күтәреүселәр командалары менән Ҡаранай үҙенә буйһондорған башҡа етәкселәр хәрәкәт итә. Шулай итеп, Минзәлә янында баш күтәреүселәр үҙәге барлыҡҡа килә. Отрядтар Баҡалы һәм Нуғайбәк ҡәлғәләре, Шуран кисеүендә, Тайыш һәм Зәй, Мамадыш, Әр һәм Малмыж, Кисеү, Шишмә һәм Черемшан ҡәлғәләре, Бөгөлмә биҫтәһе, Ижевск һәм Воткинск заводтары районында хәрәкәт итә. Көнбайыш Башҡортостанда төньяҡтағы Ижевск һәм Воткинск заводтарынан көньяҡтағы Бөгөлмәгәсә, көнсығыштағы Баҡалы һәм Нуғайбәк ҡәлғәләренән көнбайышта Ҡазанғаса ғәйәт киң биләмәләрҙә ихтилал уты дөрләй.

Күрһәтелгән район Ҡазан губернаһы территорияһына баш күтәреүселәр үтеп инмәһен өсөн мөһим хәрби әһәмиәткә эйә булған. Бының өсөн Бөгөлмәлә генерал-майор Фреймандың язалаусылар корпусы урынлашҡан, улар Яңы Мәскәү юлында хәрәкәт иткән. Баҡалы һәм Нуғайбәк ҡәлғәләрендә Минзәлә, Зәй һәм башҡа нығытылған пункттарҙа гарнизондар көсәйтелгән. Улар Башҡортостандың көнбайыш олоҫтарын күҙәтеүҙә тотҡан. Урындағы ҙур булмаған баш күтәреүселәр отрядтары төбәктәге ваҡиғаларға үҙгәреш индерә алмаған. Бында Ҡаранайҙың баш күтәреүселәр отрядының пәйҙә булыуы һәм тарҡау көстәрҙе берләштереү һәм хәрәкәттәрен яраштырыу буйынса көслө эшмәкәрлек йәйелдереүе көнбайыш Башҡортостандағы һәм Ҡазан губернаһындағы социаль шартлауға хәл иткес йоғонто яһаған. Крәҫтиәндәр һуғышы баҫтырылғандан һуң был төбәк халҡы баш күтәреүселәр хәрәкәтенә дәррәү ҡушылып китеүҙәрен түбәндәгесә аңлатҡан: «1773 йылда ауылдарҙа иген үҫтереп, ҡышын-йәйен бер ҡайҙа сыҡмайынса йәшәгән халыҡҡа Нуғай даруғаһы

башҡорто Ҡаранай Моратов етәкселегендә Нуғай даруғаһының башҡорт һәм мишәр командалары һөжүм итте. Улар туптар менән ҡоралланғайны».[13]

Бында баш күтәреүселәрҙең батша властары алдында ғәйебен кәметергә һәм аҡланырға тырышыуы ап-асыҡ күренеп тора. Шулай ҙа документта бик мөһим мәғлүмәттәр бар. Беренсенән, Ҡаранай көнбайыш Башҡортостанға баш күтәреүсе башҡорттар менән мишәрҙәрҙән торған ажарлы ғәскәр башында килгән. Икенсенән, Ҡаранайҙың ғәскәре уҡ-йәйә, һөңгө һәм ҡылыстан тыш, атыу ҡоралы һәм туптар менән ҡоралланған, был иһә икеләнеүсе халыҡҡа көслө тәьҫир иткән булырға тейеш. Өсөнсөнән, Ҡаранайҙың йоғонтоһо арттырып күрһәтелгән хәлдә лә көнбайыш Башҡортостанда ихтилал ҡабынныуында уның тотҡан урыны юғары булғанлығына шик юҡ.

Ҡаранайҙың ставкаһы Минзәлә янындағы Һарыһаҙ һәм Бикбау ауылдарында, Сарапул эргәһендәге Кәҫле ауылында урынлашҡан. Шунан тороп, баш күтәреүселәр хәрәкәтенә етәкселек иткән, Минзәләгә һөжүм итеү өсөн баш күтәреүселәр отрядтарын йыйған, мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн үҙе урындарға сыҡҡан. Декабрь урталарына Ҡаранай киң танылыу алған етәксегә әйләнә. Декабрҙең икенсе яртыһында документтарҙа «армияның баш полковнигы» тип атала башлай.[14] Ихтилал ҡыҙғанда көнбайыш Башҡортостанда баш күтәреүселәрҙең дөйөм һаны 12 мең кешегә еткән.[15] Көнбайыш Башҡортостандың баш күтәреүсе төп көстәре Минзәлә эргәһендә туранан-тура Ҡаранай етәкселегендә булған. Минзәләләге баш күтәреүселәр үҙәге Чесноковкаға, «граф Чернышевҡа» — Зарубинға буйһонған. Ысынында иһә 1773 йылдың декабренән 1774 йылдың ғинуарынаса Ҡаранай үҙаллы хәрәкәт итә. Түбәндәге ваҡиға бының шаһиты булып тора. Крәҫтиәндәр һуғышы үҙ көсөнә ингәндә, Һарытау губернаһындағы бер дворяндың крепостной крәҫтиәндәре үҙҙәренең хужаһын ҡулға ала һәм, «ҡан эскес» алпауытты язалауҙарын һорап, баш күтәреүселәрҙең командирына килтерә. Командир, «батшаның» үҙаллы язалауҙы ҡәтғи тыйыуына һылтанып, уларҙың үтенесен үтәүҙән баш тарта. Бары тик «Петр Федорович — Пугачевтың» ғына үлем ҡарарын сығарырға хоҡуғы булған. Крәҫтиәндәр алпауытты бер командирҙан икенсеһенә йөрөткән. Әммә һәр кем Пугачевтың указын боҙоуҙан ҡурҡҡан. Крәҫтиәндәр шулай Минзәләгә килеп еткән. Уларҙың һөйләүенсә, баш күтәреүселәр командиры «Ҡараҡайҙың» штабына төнгә ҡарай килеп ингәндәр. Ҡаранай, оҙон буйлы, һомғол кәүҙәле, ҡара һаҡаллы, ҡуңыр йөҙлө һылыу командир, уларҙың һүҙен тыңлап бөткәс, крәҫтиәндәрҙе туйындырырға, мунсала йыуындырырға һәм ял итергә урынлаштырырға бойора. Оҙайлы юлдан, туҡлыҡлы киске аштан һәм мунсанан һуң онотолоп йоҡлаған юлсылар һуң уяна. Крәҫтиәндәрҙең береһе тәҙрәнән килеп ҡараһа, ҡаршылағы майҙанда яңы ғына ҡуйылған дар ағасын һәм унда... алпауыттың кәүҙәһе аҫылынып тороуын күрә. Крәҫтиәндәрҙең ғәжәпләнеүенең сиге булмай: Ҡаранай, «батша» тыйыуын боҙоуҙан ҡурҡмайынса, халыҡ хөкөмөн тормошҡа ашыра.

Минзәлә Рәсәйҙең Башҡортостанды колонизациялау сәйәсәтенең мөһим төбәге була. Ул XVIII быуат башҡорт ихтилалдарын баҫтырыуҙа шомло, ҡурҡыныс урын биләй. Бында күп юлбашсылар, шул иҫәптән Бәпәнәй Төрөпбирҙин, Алдар Иҫәкәев һ.б. язаға тарттырыла. Шуға күрә башҡорттарҙың һәм Башҡортостанда йәшәгән башҡа халыҡтарҙың иғтибары Минзәләгә төбәлә. Бына ни өсөн Ҡаранайҙың баш күтәреүселәр отряды иң тәүҙә Минзәләне ҡулға төшөрөргә тырышҡан.

Ҡамау башланғанда Минзәлә отставкалағы һалдаттар һәм Смоленск шляхтаһы вариҫтары йәшәгән 500—600 ихаталыҡ нығытылған пункт булған. Тимәк, ҡәлғә халҡы, нигеҙҙә, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙән торған. Бынан тыш, ҡаланы көслө гарнизон һаҡлаған. Ҡаланы уратып алған диуар бүрәнәләрҙән һалынған, унда дошманға атыу өсөн тишектәр ҡалдырылған. Өҫтәүенә, ҡәлғә тупраҡтан өйөлгән нығытма һәм тәрән урҙар менән уратып алынған, ә тәрән йырғанаҡтарға Минзәлә йылғаһынан һыу ебәрелгән. Ҡалала туп, дары һәм снарядтар, икмәк-һыу етерлек булған. Декабрь уртаһында Минзәләгә капитан Алексеевтың даими ялан командаһы үтеп ингән һәм гарнизондың ҡеүәтен һиҙелерлек арттырған.[16] Баш күтәреүселәр өсөн Минзәлә йылғаһы ла етди ҡаршылыҡ булып тора. Ҡаранай 10 мең кешелек ғәскәргә етәкселек итә, 14 туптары була. Әммә атыу ҡоралдары етешмәй, тәжрибәле бомбардирҙар юҡ. Башҡорттар, нигеҙҙә, уҡ-йәйә һәм ҡылыс, крәҫтиәндәр һәнәк һәм балта менән ҡоралланған. Баш күтәреүселәр һөжүм итеү тәжрибәһенә эйә түгел.

1773 йылдың 23 декабрендә ҡалаға беренсе һөжүм яһала, һөжүм башланғанға тиклем Ҡаранай гарнизонға һәм ҡала кешеләренә ҡәлғә ҡапҡаларын ҡан ҡойошһоҙ асырға һәм «бөйөк батша Петр Федоровичҡа» ант итергә саҡырып, «батша» указын ебәрә.[17] Кире яуап алғас, Ҡаранай ғәскәрен һөжүмгә күтәрә. Һуғыш аяуһыҙ була һәм көнө буйы дауам итә. Әммә ҡамауҙағыларҙың атыу ҡоралы һәм туптары күп булыуы, ҡаланың уңайлы урында урынлашыуы баш күтәреүселәргә баҫып инергә мөмкинлек бирмәй. Улар бик күп юғалтыуҙар кисереп, һөжүмде туҡтатырға мәжбүр була.

Минзәләгә дөйөм һөжүм итеү 26 декабргә тәғәйенләнә. Ике көн буйы, 24 һәм 25 декабрҙә ҡала иртәнән алып кискә тиклем 14 туптан бер туҡтауһыҙ утҡа тотола. 26 декабрҙә Ҡаранай дөйөм һөжүмгә күсә. Баш күтәреүселәр ҡаланы дүрт яҡлап уратып алып, дошмандың туптан һәм мылтыҡтан туҡтауһыҙ ут яуҙырыуы аҫтында тәрән соҡорҙо һәм Минзәлә йылғаһын кисә, ҡала ситенә бәреп инеп, ығы-зығы тыуҙырыу өсөн ырҙынды һәм йорттарҙы яндыра. Гарнизон, ғәйәт көслө ҡаршылыҡты еңеп, һөжүмде кире ҡаға. Күп сәғәтлек ажарлы алыштан һуң Ҡаранайҙың 10 меңлек сиреүе, яу яланында бихисап шәһиттәрен һәм яралыларын, өс тубын ҡалдырып, сигенергә мәжбүр була. Баш күтәреүселәр ғәскәре Деухово һәм Мазино ауылдарында туҡтала. Минзәләне ҡамау дауам итә. Ҡамауҙағыларҙы хәлдән тайҙырыу өсөн Ҡаранай көн һайын 200—300 кешелек атлылар отрядтарын ҡалаға һөжүм итергә ебәрә, улар ҡәлғәгә яҡын килеп, мылтыҡтан ут һәм

йәйәнән уҡ яуҙыра. Уларға ҡалалағыларҙың бесәнгә, утынға һәм аҙыҡ-түлеккә сығыу юлын ҡаплау, хөкүмәт ғәскәрҙәрен ҡамауҙағыларға ярҙамға үткәрмәү бурысы йөкмәтелә.[18]

Декабрь уртаһында ҡалаға Нуғайбәк ҡәлғәһе коменданты, язалаусылар командаһы капитаны Кирилл Алексеев үтеп инә.[19] Генерал Фрейман Бөгөлмәнән Евсеев командаһын ебәрә. Был команданың яҡынлашып килеүен ишетеп, Ҡаранай уңышһыҙ дөйөм һөжүмдән һуң таралышҡан көстәргә йыйылырға оран һала. «Үҙемдең, армияның баш полковнигы Ҡаранай Моратов исеменән, — тип яҙа ул фарманында, — бойорам: барлыҡ урындарҙағы армиялар һәм ауылдарҙағы хәрби башлыҡтар, дошман ғәскәренә Минзәләгә килеп етергә 20 саҡырым ҡалды, мин үҙемдең сиреүем менән ҡаршы сығам, һеҙ ҙә бөтә командаларығыҙ менән дошманды туҡтатыу өсөн Иҫке Таҙлар ауылында тупланығыҙ». Ҡаранай «төрлө ауылдарҙағы ғәскәри халыҡты ылауҙарҙа йыйып алыуҙы» талап иткән.[20]

Крәҫтиәндәр ихтилалына, шул иҫәптән крәҫтиәндәр һуғыштарына, тәртип йомшаҡлығы, баш күтәреүселәр хәрәкәтенең тарҡаулығы хас. Хәрби хеҙмәткә күнеккән казактар, башҡорттар, ҡалмыҡтар өҫтөнлөк иткән баш күтәреүселәр төбәктәренән айырмалы рәүештә, көнбайыш Башҡортостанда ихтилалсыларҙы, нигеҙҙә, рус һәм рус булмаған крәҫтиәндәр тәшкил итә. Улар, һәр уңышһыҙлыҡтан файҙаланып, ҡасып ҡайтырға ғына тора. Ныҡлы тәртип урынлаштырыу һәм дөйөм халыҡ көрәшен ойоштороу өсөн Ҡаранайға ниндәй ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға тура килеүен күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел. Евсеевтың язалау командаһын Минзәләгә үткәрмәҫкә тырышҡанда ла шулай килеп сыға. Күрәһең, Ҡаранай ҡыҫҡа ваҡыт эсендә баш күтәреүселәр көстәрен йыйып өлгөрә алмағандыр һәм Евсеев бер ниндәй ауырлыҡһыҙ ҡалаға үтеп ингәндер.[21]

Минзәләне ҡамау һәм һөжүм итеү, Баҡалы һәм Нуғайбәк ҡәлғәләрендә әүҙем эш алып барыуҙан тыш, Ҡаранай көнбайыш Башҡортостандағы баш күтәреүселәр хәрәкәтенә дөйөм етәкселек итеүгә лә күп көс һала. Сәрмәсән ҡәлғәһендәге Пугачев полковниктары Айыт Ураҙымбәтов менән Осип Енгалычев уның ҡул аҫтында хәрәкәт итә.[22] Минзәләнән көнсығышҡа табан, Ҡазан даруғаһы олоҫтарында Надир олоҫоноң яһаҡлы татары, поход старшинаһы Ибраш Ураҙбахтин отряды һуғыша. Ул Ҡаранайҙың баш күтәреүселәр отрядына халыҡты йәлеп итеү өсөн дә көслө эш алып бара. 1773 йылдың декабрь башында уҡ Яҡуп ауылы старшинаһына яҙған хатында ул «бөтәһенең дә поход старшинаһы Ҡаранай Моратовҡа килеүен» талап итә.[23] Ҡазан губернаһы Әр даруғаһы биләмәләрендә Пугачев полковнигы Бесәк ауылының йомошло татары Мәсәғүт Ғүмәров хәрәкәт итә. Уның отряды 1700 кешегә еткән, айырым командалар Ҡазан тирәһендә торған. Мәсәғүт Ҡаранайға ярҙамға кешеләр һәм туптар ебәреп торған.[24] Кама аръяғының көнбайышында старшиналар Күзмәт Ишмәтов, Шәфей Тойғужин, Шәрип Яҡупов, йөҙ башлыҡтары Үтәгән Моратов, Василий Иванов, Назар Алексеев Алабуғаны ҡамай.[25] Юрмый олоҫоноң отставкалағы старшинаһы полковник Нуғайбәк Әсәновтың һәм Ҡазан өйәҙе Асҡар ауылы

татары Әренҡол Асеевтың отрядтары 1774 йылдың 15 ғинуарында Зәй ҡәлғәһен һөжүм итеп яулай.[26] Терһен олоҫо һәм Вятка провинцияһы сиктәрендә полковник Әбделйәлил Һөләймәнов менән атаман Йүскәй Ҡудашевтың отрядтары хәрәкәт итә.[27] Ғинуарға баш күтәреүселәр Ижевск, Шаран, Көньяҡ Кама заводтарын, Баҡалы, Нуғайбәк, Зәй ҡәлғәләрен, Мамадыш, Аҡтаныш ауылдарын баҫып ала. Минзәлә менән Алабуғанан тыш, Черемшан, Тишнек һ. б. ҡәлғәләр ҡамауҙа ҡала.

1774—1775 йылдарҙың ҡышында көнбайыш Башҡортостандағы хәлдәрҙе генерал Фрейман ентекле тасуирлап ҡалдырған — ул территорияны күҙәтеүҙә тоторға тейеш була һәм бурысын үтәй алмай. 1773 йылдың аҙағында генерал был төбәктә ихтилал йәйелдерелеүенә ойошҡан рәүештә ҡаршылыҡ күрһәтә алмай. Фрейман Бөгөлмәгә ҡыҫырыҡлана, Өфө һәм Ырымбур менән бәйләнеш «фетнәсе башҡорттар» тарафынан өҙөлә, баш күтәреүсе отрядтар «гелән алмаш аттарҙа» хәрәкәт итә, «ваҡ ҡар уларға ҡамасауламай». Язалаусы корпустан 2 меңләгән башҡорт баш күтәреүселәр яғына сыға, ошонан һуң язалаусы көстәр күпселегендә «йәйәүле ғәскәрҙән тора һәм уңышҡа ирешә алмай».[28]

Ҡаранай баш күтәреүсе отрядтар хәрәкәттәрен яраштырып ҡына ҡалмай, үҙе лә урындарға сығып йөрөй һәм тәүәккәл ҡарарҙар ҡабул итә. Мәҫәлән, 1773 йылдың декабрендә ул 800 кешелек отряд башында Терһен олоҫоноң Түбә ауылына, алпауыт Осип Тевкелевтың вотчинаһына килә һәм, «батша указын ишеттереп», крепостной крәҫтиәндәрҙе батша Петр Федорович исеменән ирекле тип иғлан итә, ә уларҙың береһен, Әбделйәлил Һөләймәновты, Терһен олоҫоноң старшинаһы итеп тәғәйенләй. Ҡаранай Әбделйәлилгә ҙур хоҡуҡтар биреп, әгәр батша Петр Федоровичҡа дошмандар яу аҫһа, тулы командаһы менән уларға ҡаршы һуғышҡа инергә, тирә-яҡтағы халыҡты ғәскәргә алырға, ә ҡаршы торғандарҙы юҡ итергә һәм имениеһын тартып алырға бойора.[29] 1773 йылдың 24 декабрендә Ҡаранай баш күтәреүселәр армияһы полковнигы Йәрмөхәмәт Ҡәҙермәтов менән бергә батша ҡарамағындағы Сарапул ауылын баҫып ала.[30]

1774 йылдың ғинуар башында Алабуғала башҡорт, татар, рус, удмурттарҙан торған 6 мең баш күтәреүсе йыйыла, ҡәлғәне ҡамауҙа тота. Ҡаранай уларҙы үҙе һөжүмгә күтәрергә була. Ҡаранайҙың писаре Үмәр Мортазин 11 ғинуарҙа ҡамауҙы етәкләүселәргә шундай приказ ебәрә: «... һиңә, старшина Шәриф Яҡуп улына, йөҙ башлығы Назар Алексеевҡа, шулай уҡ башҡа урындарҙағы ғәскәри кешеләргә бойорам. Тирәяҡтан һәр төрлө саралар менән ғәскәр йыйығыҙ: бик тиҙҙән һуғыш буласаҡ, ныҡ әҙерлекле тороғоҙ. Атаман Ҡаранай үҙе килә, был хаҡта барыһына хәбәр еткерегеҙ, вайымһыҙ булмағыҙ».[31] Был документ Ҡаранайҙың көнбайыш Башҡортостан ихтилалсылары араһында ниндәй ҙур, дөйөм танылған абруй менән файҙаланыуын асыҡ күрһәтә. Баш юлбашсы килгәнгә тиклем үк Алабуғаға бер нисә тапҡыр уңышһыҙ һөжүм ойошторола. Ҡаранай килеү менән уның яҙмышы хәл ителә. Әммә артабанғы ваҡиғалар Ҡаранайҙы тиҙ арала Алабуғанан китергә һәм үҙенең баш күтәреү үҙәгенә ашығырға мәжбүр итә.

1773 йылдың 26 декабрендә Ҡазанға хөкүмәт ғәскәрҙәренең яңы баш командующийы, генерал-аншеф, тәжрибәле язалаусы А.И.Бибиков килә. 1764 йылда ул кенәз А.А.Вяземский менән бергә Уралдағы завод крәҫтиәндәренең сыуалыштарын баҫтыра, 1771—1772 йылдарҙа Польша конфедераттары ихтилалын баҫтырыуҙа язалау ғәскәрҙәренә етәкселек итә. Бибиков хөкүмәт ғәскәрҙәрен туплау, уларҙы нығытыу һәм тулыландырыу буйынса ашығыс саралар күрә. Язалау ғәскәрҙәре һөжүменең төп йүнәлештәре билдәләнә. Уның буйынса 1774 йылдың 4 ғинуарында көнбайыш Башҡортостанда ихтилалды баҫтырыу өсөн Бибиков Ҡазандан ике язалау экспедицияһын ебәрә. Уның береһен Алексеевск—Шишмә—Зәй маршруты буйынса полковник Ю.Б.Бибиков етәкләй, капитан Г.Карташевскийҙың экспедицияһы Әр—Мамадыш—Зәй маршруты буйынса хәрәкәт итә. Зәйҙә бергә ҡушылып, улар Минзәләгә барырға тейеш.[32] Минзәләгә язалау отрядтарының яҡынлашыуы хаҡында төрлө юҫыҡҡа хәбәр таратыла. 10 ғинуарҙа йөҙ башлыҡтары Абдулла Тикмәтов менән Смаил Бикҡолов Сухарево ауылынан Әренҡол Асеевҡа Ҡазандан «ике юлдан» ике команда ебәрелеүен хәбәр итә. Шул көндө Ҡазандан ҡайтҡан Сухарево крәҫтиәне Никифор Михайлов та был хаҡта әйтә.[33] Шунда баш күтәреүселәрҙең йөҙ башлығы Тимербай язалаусыларҙың етеп килеүе хаҡында Торновҡа хәбәр ебәрә.[34] Әммә Торнов бер сара ла күрмәй.

Полковник Бибиковтың командаһында 4 гренадер ротаһы, 3 гусар эскадроны һәм 2 туп була. 13 ғинуарҙа Сухарево ауылы эргәһендә Бибиков Ҡаранайҙың баш күтәреүселәр ғәскәренең алдынғы разъездарын ҡыйрата. 14 ғинуарҙа Ерекле һәм Түбә ауылдарында ихтилалсылар отрядтарын тарҡата. 16 ғинуарҙа Аҫҡар ауылы янында Әренҡол Асеевтың 600 кешелек отряды Бибиков командаһына һөжүм итә. Әренҡол уңышһыҙлыҡҡа осрай.

Шул уҡ көндө Бибиков бынан бер көн генә алда Нуғайбәк Әсәнов менән Әренҡол Асеев баҫып алған Зәйгә яҡынлаша. Оҙайлы һәм ҡан түккес алыш була, баш күтәреүселәр тар-мар ителә.[35] Бибиков рейды аяуһыҙлыҡ, тыныс халыҡты ҡырыу һәм ауылдарҙы яндырыу менән оҙатыла. 13 ғинуарҙа баш күтәреүселәрҙең йөҙ башлығы Бикбау Муллағолов Торновҡа яҙған рапортында, язалаусылар Сухарево ауылы янындағы алышта 2 ауылды яндырҙы, тип хәбәр итә. Һуңынан тағы 4 ауылды яндырыу тураһында мәғлүмәт килә. [36]

Изюм гусар полкы капитаны Г.Карташевскийҙың язалау командаһы 50 гренадер, бер туплы гусарҙар ротаһы менән 5 ғинуарҙа Ҡазандан сығып, марш менән үтә һәм 7 ғинуарҙа Әр ҡәлғәһенә яҡынлаша. Бесәк ауылы янында ул Мәсәғүт Ғүмәровтың баш күтәреүселәр отрядын ҡыйрата, артабан Әр юлынан Тайыш заводына һәм Вяткаға инә, шунан баш күтәреүселәр ҡамауҙа тотҡан Алабуғаға йүнәлә.[37]

Полковник Бибиковтың Зәйгә һөжүм итеүе тураһында хәбәр алғас, Ҡаранай был райондың баш күтәреүселәренә ярҙамға ашыға. Алабуға эргәһендәге баш күтәреүсе көстәргә дөйөм етәкселек итеү өсөн үҙе урынына Шәфей Тойғужинды ҡуя, ә «Алабуға янындағы ғәскәри кешеләргә»

Ҡаранай былай тип бойора: «Һеҙ, старшина Күзмәт Ишмәт улы һәм старшина вазифаһын башҡарыусы йөҙ башлығы Шәриф Яҡуп улы, йөҙ башы Назар Алексей улы, йөҙ башлығы Үтәгән Морат улы, бөтәгеҙ ҙә старшина Тойғужинға буйһоноғоҙ һәм унан фарман алығыҙ, сөнки беҙ гусарҙар яндырған мосолман ауылдарының үтенесе буйынса, Сухарево ауылынан сығып, бер нисә команда менән уларға ҡаршы киттек».[38]

Әммә Ҡаранай үҙ ғәскәренең алдынғы һыҙығына ярҙамға ташланырға өлгөрмәй. Шул ваҡытҡа, ул Алабуғанан Зәйгә юлланғанда, төп таяныс урындарын язалаусылар баҫып алған, ә баш күтәреүсе отрядтар ҡыйратылған була. 20 ғинуарҙа Черемшан ҡәлғәһенә һөжүм иткәндә Айыт Ураҙымбәтов менән Йосоп Енгалычев отрядтары тар-мар ителә, ә етәкселәр үҙҙәре әсир төшә.[39] 22 ғинуарҙа Бибиков Алабуғаға Неклюдовтың көслө командаһын ебәрә. Бер үк ваҡытта Карташевскийҙың да язалау командаһы яҡынлашып килгәндер, күрәһең. Ҡамауҙағы Алабуға гарнизоны ла дәррәү күтәрелә.[40] Баш күтәреүселәр язалаусыларға ҡаршы сығып һөжүм итә, әммә еңелеүгә осрай. Ҡалған ихтилалсылар төрлө яҡҡа таралыша, Алабуғанан ҡамау алына. Алабуғалағы ваҡиғалар тураһында хәбәр алғас, полковник Бибиков төп көстәр менән Минзәләгә йүнәлә.

Һөҙөмтәлә Бибиковҡа ҡаршы сығыусы Ҡаранай тарҡалған отрядтарын йыя алмай, көнбайыш Башҡортостандағы ихтилал үҙәгенән һәм төп көстәрҙән юлы киҫелә. Ҙур булмаған отряды менән ул Минзәләгә ашыға. Язалау көстәре яҡынлашыу менән ҡамауҙағы ҡала гарнизонына ла йән инә. 13 ғинуарҙа уҡ әле баш күтәреүселәр армияһы полковнигы Аҫылғужа Мутасов Торновҡа ебәргән рапортында: «Дошман Минзәләнән көн дә сығып, яҡындағы ауылдарҙы ҡыра һәм күп халыҡты юҡ итә. Ә беҙ уларҙың һөжүменә ҡаршы тора алмайбыҙ, сөнки улар ҙур туптарҙан ата, ә беҙҙең туптарыбыҙ юҡ», тип хәбәр итә. Аҫылғужа туптар менән ярҙам итеүҙәрен һорай.[41] Торнов рапортҡа һәм үтенескә яуап бирмәй. Бына шундай сиктән тыш мөшкөл шарттарҙа Ҡаранай Минзәләгә яҡынлаша һәм дөйөм етәкселекте үҙ өҫтөнә ала. 20 ғинуарҙа яу ҡуба. Ҡаранай 21 ғинуарҙа Торновҡа ебәргән рапортында: «20 ғинуарҙа Минзәләнән сыҡҡан көстәр Һарыһаҙ ауылында 45 кешене туптан һәм мылтыҡтан утҡа тотоп юҡ итте, күптәрҙе әсир итте һәм 50 атты ҡулына төшөрҙө. Ҡорал булмағас, дошманға ҡаршы тороп булмай», — тип хәбәр итә.[42]

Язалау көстәренең Минзәләгә һөжүм итәсәген алдан күреп, Ҡаранай үҙ сиреүен нығыта башлай. 26 ғинуарҙа Әбделкәрим Рахманғоловҡа, атаман Торновтың писаренә яҙған хатында ул үҙенең ғәскәренә кисектермәй 12 туп ебәреүҙе талап итә. Был мәсьәлә хәл ителмәгәндә, Ҡаранай шунда уҡ «граф Иван Никифоровичҡа», йәғни Зарубинға хәбәр итеү менән ҡурҡыта.[43]

Баш күтәреүселәр төбәге өсөн шундай киҫкен мәлдә ихтилал көстәренә етәкселек итеүҙә Берда һәм Чесноковка үҙәктәрендәге буталсыҡ «ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарыуға» килтерә. Көнбайыш Башҡортостанда ихтилал ҡыҙған мәлдә Пугачев 1773 йылдың декабрендәге указы менән

В.И. Торновты (фарсы кешеһе) Нуғайбәк ҡәлғәһенең атаманы итеп тәғәйенләй.[44] Торнов сығышы менән Мешхед ҡалаһынан, 1756 йылдан алып Рәсәйҙә Ставрополье ҡалмыҡтары араһында йәшәй. 1773 йылдың октябрендә ихтилалға ҡушыла һәм Ырымбур янында Т.Падуровтың полкында хеҙмәт итә. Ойоштороу һәм полководец таланты менән айырылып тормай. 1773 йылдың декабренең икенсе яртыһында ул 4 казак менән Нуғайбәккә килә. Һуңыраҡ Зарубиндың энеһе И.И.Ульянов та бында ебәрелә.

Тарихи әҙәбиәттә, Пугачев Торновты Минзәлә баш күтәреүселәр төбәгенә дөйөм етәкселекте ойоштороу һәм ғәмәлгә ашырыу өсөн ебәргән, Торнов бурысын уңышлы үтәгән, тигән фекер нығынған.[45] Әммә бер ниндәй һәләтһеҙ Торновтың был төбәктәге эшмәкәрлеге күпертеп күрһәтелә.

Торнов Минзәлә районының баш күтәреүселәр ғәскәренең түгел, ә Нуғайбәк ҡәлғәһенең атаманы итеп тәғәйенләнә. Үҙенән һорау алғанда Пугачев Торновты полковник итеп ҡуймауын әйтә. Торнов үҙе Ҡазан Йәшерен комиссияһында Нуғайбәккә килеүенең маҡсатын тәфтишселәргә былай тип аңлата: «... команда йыйып, башҡорттарға халыҡты таларға юл ҡуймаҫка, шулай уҡ хәрби командаларҙы Ырымбурға үткәрмәҫкә».[46] Әммә 1773 йылдың 15 декабрендә Берда биҫтәһендә Пугачевтың Торновҡа биргән указында «... командаға йыйылып, буйһонмағандарҙы бер һүҙһеҙ, туҡтауһыҙ, тауышһыҙ, ыңғырашмайынса ҡырырға»[47] тиелгән. Торнов халыҡ менән рәхимһеҙ эш итеүҙә батшаның ышанысын аҡлай. Пугачев менән Зарубин башҡа эмиссарҙарына ла «буйһонмаусыларҙы бер һүҙһеҙ, бер тауышһыҙ, кисектермәйенсә аҫырға һәм киҫергә» сикләнмәгән хоҡуҡтар бирә.[48]

Минзәлә баш күтәреүселәр төбәгендәге ихтилалсылар араһында милләт-ара низағҡа килгәндә, улар дөйөм күренеш булмай һәм был башҡорт етәкселәренең ғәйебе түгел. Калнин олоҫо татарҙары старшинаһы Ишкилде Ишмурзин 1773 йылдың декабрендә Торновҡа баш күтәреүсе отрядтар командирҙарының Ҡазан тирәһендәге «ғәйепһеҙ кешеләрҙе» талауы, йәберләүе һәм рәнйетеүе осраҡтары тураһында хәбәр итә. Был етәкселәр «тиҙҙән яу ҡубасаҡ Минзәләгә һәм Бөгөлмәгә килмәйҙәр».[49] Корин баҡыр иретеү заводы эшселәре 1774 йылдың 14 ғинуарында, дөрөҫ тартып алынмаған мөлкәтен ҡайтарып биреүҙе һорап, баш күтәреүселәрҙең йөҙ башлығы Назар Алексеевҡа мөрәжәғәт итә.[50]

Был документтарҙан күренеүенсә, талауҙар һәм көсләүҙәр милләт-ара мөнәсәбәттәргә бәйле булмаған. Әйтәйек, 1774 йылдың ғинуарында Юрмый олоҫоноң яһаҡлы татарҙары старшинаһы Смаил Биккинин Торновҡа ебәргән рапортында, Емаш ауылы кешеләре Смаил Төмәнәев менән уның атаһы Төмәнәйҙең ялыуы буйынса ул өс баш күтәреүсе татарҙы: Наратаҫты ауылынан Әбдүт Сөләймәновты, Ямаҙы ауылынан Әбделйәлил Әжмәтовты һәм Төмәнәк ауылынан Иманғол Һабановты «теге йортта булғанда, ҡатындарын ҡулға алып, төрлө кешелекһеҙ йәберләүҙәргә дусар иткәндәре һәм бал эскәндәре, өҫтәүенә ике биҙрә

сөсө балды тартып алғандары өсөн» язаға тарттырыуы тураһында хәбәр итә. Йәберләүселәр дүртәү була, ләкин берәүһе ҡаса. Ҡалған өсәүһен «теге ғәйептәре өсөн ҡамсы менән һуҡтырып хөкөмгә тарттыралар һәм хеҙмәткә алалар».[51] Шулай итеп, татар халҡын татар баш күтәреүселәре талай.

1773 йылдың декабрь айының икенсе яртыһында Нуғайбәккә килгәс, Торнов казак, башҡорт һәм татарҙарҙан торған 400—500 кешелек отряд менән ҡәлғәне нығыта башлай. Ул баш күтәреүселәр отрядтары етәкселәре, старшиналар һәм урындағы күп милләтле ябай халыҡ менән әүҙем хат алыша.[52] Йыйылған ҡағыҙ өйөмө, Торнов Нуғайбәккә килгәс, баш күтәреү эшмәкәрлеген йәнләндергән, уның отрядына «Ҡаранай Моратов менән Ҡыҙрас Муллаҡаевтың электән ойошҡан отрядтары килеп ҡушылған», тип уйларға нигеҙ биргәндер, күрәһең.[53] Әммә Торнов менән һанап кителгән башҡорт етәкселәренең көстәре 1774 йылдың февраль аҙағында берләшә. Ә 1773 йылдың декабрендә Ҡаранай — Минзәлә эргәһендә, ә Ҡыҙрас менән башҡа башҡорт старшина-полковниктары Алабуға янында хәрәкәт итә. Торновтың баш күтәреү эшмәкәрлеге Нуғайбәк ҡәлғәһе һәм уның тирә-яғы менән сикләнә. Торновты көнбайыш Башҡортостандағы баш күтәреү хәрәкәтенең етәксеһе итеп ғәмәлдәге эштәре түгел, ә совет тарихсылары яһаны. Хат алышыуға килгәндә, ул күберәген Чесноковка үҙәге менән бәйләнеш тотҡан. Торновтың поход канцелярияһы архивында тере көс, туптар йәки ҡорал һорап мөрәжәғәт итеүҙәргә бер генә ыңғай яуап та һәм ярҙам күрһәтеү осрағы ла юҡ. Хатта ул Чесноковка лагерынан Минзәләне һаҡлау өсөн алған ике туп та тәғәйенләнгән урынына барып етмәгән. 1774 йылдың 26 ғинуарында Ҡаранай Торновтың писаре Әбделкәрим Рахманғоловҡа ебәргән хатында: «...беҙ белештек, һеҙгә ике туп, ә беҙгә 10 туп ебәрелгән, мин улар артынан өс кешене ебәрҙем, тик улар әйләнеп килмәнеләр әле», — тип яҙа.[54]

Шулай итеп, Минзәләләге баш күтәреү төбәгенә Торновты ебәреү һәм уға сикләнмәгән вәкәләтлектәр биреү көтөлгән һөҙөмтә килтермәй, ә етәкселектә буталсыҡлыҡ тыуҙыра. Ысынында иһә, Ҡаранай етәксе булып ҡала, ә Торнов баш күтәреүселәр сафтарын ҡаҡшата ғына.

Ә ул арала көнбайыш Башҡортостанда хәл ҡырҡыулаша бара. 20 ғинуарҙа Минзәлә янында еңелгәндән һуң, Ҡаранай Торновҡа туптар ебәреүен һорап мөрәжәғәт итә. Шундай уҡ үтенес менән һәм, Зарубинға рапорт яҙам, тип ҡурҡытып, ул 26 ғинуарҙа Торновтың писаре Әбделкәрим Рахманғоловҡа мөрәжәғәт итә.[55] Әммә был юлы ла Нуғайбәк ҡәлғәһенән ярҙам килмәй. Язалаусылар Минзәләгә һөжүм итер алдынан уҡ Зарубин Торновҡа ярҙамға 200 казак менән үҙенең энеһе И.И.Ульяновты ебәргән була. Ульянов, баш күтәреүселәр районына етди ярҙам кәрәклегенә инанғас, шунда уҡ Чесноковкаға әйләнеп килә. Баш күтәреүселәрҙең юғары етәкселегендәге быңдай тарҡаулыҡ шарттарында 1774 йылдың 31 ғинуарында Минзәлә эргәһендә полковник Бибиков Ҡаранайҙы тағы бер тапҡыр еңә.

Ғинуар башында уҡ, язалаусы ғәскәрҙәр һөжүмен көсәйткәнгә тиклем, Торнов Чесноковка лагерына өҫтәлмә көс, туптар һәм дары ебәреүҙәрен һорап мөрәжәғәт итә. Зарубин 17 ғинуарҙағы ордеры менән Торновҡа ебәргән рапортында: «...ҡоралы казактар командаһын ебәреүҙе һорайһығыҙ, ә беҙҙә ҡорал да, ебәрерлек кеше лә юҡ», — тип яҙа. «Граф» «үҙҙәренә нығыраҡ тырышырға, ул яҡтарҙан казактар йыйырға» тәҡдим итә. «Туптар ҙа юҡ, эшләнмәгән, заводтан килтерелмәгән, эшләп килтерһәләр, һеҙгә ебәрелерҙәр ине», ти.[56] Бындай вәғәҙәләр менән ҡәнәғәтләнмәйенсә, Торнов үҙе Чесноковкаға юллана һәм Нуғайбәккә 3 туп һәм 2 бот дары алып ҡайта.[57] Нуғайбәк менән Баҡалыны юғалтҡандан һуң, Торнов йәнә үҙе Чесноковкаға бара һәм Ҡаранайҙы ла үҙе менән бергә ала, Чесноковканан улар Бердаға йүнәлә. Баш күтәреү үҙәгендә йөргөнсөләргә бер ниндәй ярҙам күрһәтелмәй, бары тик күңелде күтәреү өсөн Хәрби коллегия Торновҡа «атаман» исемен бирә һәм Нуғайбәккә кире барырға ҡуша.[58]

Торнов менән Ҡаранай юҡта Минзәлә баш күтәреү төбәгендә етди ваҡиғалар булып үтә. 10 февралдә полковник Бибиков, Нуғайбәккә баҫып инеп, башҡорт полковниктары Ҡыҙрас Муллаҡаев, Ишҡар Арыҫланов, Ҡәйеп Зыямбәтов һәм Моратша Һыртланов етәкселегендәге баш күтәреүселәр отрядтарын ҡыҫырыҡлап сығара. 11 февралдә Баҡалы ҡәлғәһе бирелә.[59] Артабан Бибиковтың язалау командаһы Боғорослан-ға китә, шунда Ырымбурға йүнәлеүсе генерал П.М.Голицын корпусына ҡушыла. Көнбайыш Башҡортостанда хәрәкәтте баҫтырыу һәм Өфөгә һөжүм итеү өсөн генерал А.Л.Ларионовтың Ҡазан дворян-доброволец-тарынан, Томск пехота полкынан, гусарҙар һәм карабинерҙар эскадрондарынан торған язалау корпусы Бөгөлмәгә килә.[60] Бер нисә тапҡыр еңелеүҙәренә һәм төп таяныс пункттарын юғалтыуҙарына ҡарамаҫтан, баш күтәреүселәр төп көстәрен һаҡлай әле.

Зарубин икенсе тапҡыр Нуғайбәккә «туптары һәм күп һанлы шайкаһы менән» И.Ульяновты ебәрә, ул 18 февралдә Баҡалы менән Нуғайбәкте баҫып ала. Ул ваҡытҡа Бибиков командаһы был райондан киткән була. Нуғайбәккә әйләнеп килгән Торновты Ульянов яуыз ниәт менән тотҡарланыуҙа ғәйепләп, ҡулға ала. Әммә Торнов Хәрби коллегияға мөрәжәғәт итә: уны аҡлайҙар һәм азат итәләр.[61] Ике эмиссар араһындағы был көрәш ваҡытлыса тыныслыҡ урынлашҡанда, Бибиков Голицын эргәһенә киткәндә, ә Ларионов һөжүм итергә ашыҡмаған мәлдә бара. Баш күтәреүселәр фронтын нығытыу өсөн уңайлы шарттар ҡулдан ысҡындырыла. Торнов менән Ульянов үҙ-ара низағлашҡанда баш күтәреүсе отрядтар етәксеһеҙ ҡала. 19 февралдә поход старшинаһы В. Еремкин Торновҡа ебәргән рапортында, Ҡаранай унның Тегермән ауылына килеп етеүен талап итә, ә үҙе был ауылда булмай сыға, тип хәбәр итә. Һаҡлы-Баш ауылы башҡорто Хәләй Нөркин, «Моратов командаһы менән Бикбау ауылына китте», ти.[62] Был документтан шундай нәтижәгә килергә мөмкин: Торнов менән Ҡаранай Берданан бергә әйләнеп киләләр. Торнов ҡайҙалыр тотҡарлана, ә Ҡаранай шунда уҡ ғәскәре эргәһенә ашыға. Әммә уның элекке

хоҡуҡтары хәҙер юғалтылған була. Пугачев менән Зарубиндың эмиссарҙары уны баш күтәреү ғәскәренә етәкселек итеүҙән ситләштерә, һөҙөмтәлә улар үҙҙәре лә эшләмәй, Ҡаранайға ла эшләргә ирек бирмәй. Март башында башҡорт полковниктары Ҡәйеп Зыямбәтов, Ҡыҙрас Муллаҡаев һәм Моратша Һыртланов Хәрби коллегияға яҙған рапортында язалау ғәскәрҙәренең һәм «тоғро» старшиналарҙың һөжүме көсәйеүенә, баш күтәреүсе көстәрҙең хәлһеҙләнеүенә, насар ҡоралланыуына һәм Минзәлә менән Нуғайбәк янындағы ғәскәргә берҙәм етәкселек итеүсе булмауына борсолоу белдерә. Шуға күрә улар «бында атаман Әлибай Мырҙағоловты ебәреүҙәрен» талап итә, «сөнки бында халыҡты тыңлата алырлыҡ һәм халыҡҡа таяныс булырлыҡ башлыҡ юҡ»,[63] тип белдерә.

1774 йылдың февраль-мартында көнбайыш Башҡортостанда булып үткән фажиғәле ваҡиғалар тарихи әҙәбиәттә аҙ өйрәнелгән һәм уҡыусылар был хаҡта хәбәрҙар түгел. Шуға күрә 1774 йылдың яҙ башында көнбайыш Башҡортостанда ихтилал барышы, йәғни Крәҫтиәндәр һуғышының иң ҡатмарлы осоро тураһында ентекләберәк бәйән итеү фарыз.

Февраль аҙағында генерал Ларионов корпусы Бөгөлмәнән Нуғайбәккә юллана һәм 6 мартта уны баҫып ала. Торнов һәм башҡорт полктары үҙҙәренең юлбашсылары менән Стәрлетамаҡ ауылында нығына — Нуғайбәктән Ларионов шунда йүнәлә. 10 мартта Торнов Стәрлетамаҡты ҡаршылыҡһыҙ тиерлек ҡалдыра. Баҡалы ҡәлғәһе Ульянов етәкселегендә оҙаҡ һәм ныҡышмалы ҡаршы тора. Полковник Кожиндың регуляр полкы уны 13 мартта ғына баҫып ала. Баҡалы ҡәлғәһе Минзәләләге баш күтәреү төбәгенең һуңғы таянысы була.

Ҡәлғә ҡолағандан һуң Ульянов Чесноковкаға сигенә. Торнов Стәрлетамаҡты ҡалдырғандан һуң яңы ғәскәр туплай башлай. Әммә ул тупаҫ әҙәм булып сыға, урындағы халыҡ менән рәхимһеҙ мөғәмәлә итә. Хатта Туҡтамыш Ишбулатов Ҡазан Йәшерен комиссияһында яуап тотҡанда Торновты насар яҡтан ҡылыҡһырлай: «... ялған батшаға үтә ныҡ тырышлыҡ күрһәтте һәм уның дошмандарына ҡарата кешелекһеҙ мөнәсәбәттә булды».[64] Торновтың башҡа диндән булған халыҡтарға ҡарата аяуһыҙлығы тураһында легендалар йөрөгән. Уның арҡаҙаштары, башҡорт полковниктары Ҡыҙрас, Ҡәйеп һәм Ишҡар Өфө провинцияһы канцелярияһына 10 апрелдә шундай рапорт яҙған: «...күп ғәйепһеҙ кешеләрҙе аҫып һәм киҫеп һәләк итте, ә ҡайһы берҙәрен йән биргәнсе ғазапланы».[65] Торнов отрядынан баш күтәреүсе Иван Князев комиссияға, Бишҡурай ауылына килгәс, Торнов «өс кешене бер сәбәпһеҙ сәнсеп үлтерҙе»,[66] тип һөйләй. Шулай итеп, Торнов үҙенең көрәштәштәре һәм халыҡ араһында абруйын юғалта. 8 апрелдә башҡорт полковниктары Ҡыҙрас Муллаҡаев етәкселегендә Торновты ҡулға ала һәм властарға тапшыра.[67] Был хәл Торнов отряды йоҡларға туҡтаған Бишҡурай ауылында була.

Шулай итеп, Минзәлә баш күтәреү районы юҡҡа сыға. Һүлпән һәм ҡыйыуһыҙ генерал Ларионовты подполковник И.И.Михельсон алыштыра һәм үҙенең язалау корпусын Чесноковкаға алып бара. Һәммә тарихсылар, үрҙә һанап кителгән бөтә яуҙарҙа башҡа башҡорт етәксе-

ләре менән бергә Ҡаранай ҙа ҡатнашҡан, тип бер тауыштан раҫлай. Әммә был көнбайыш Башҡортостандағы башҡорт юлбашсыларын ябай дөйөмләштереүгә оҡшаған. Һаҡланған сығанаҡтар буйынса, Нуғайбәк, Баҡалы, Стәрлетамаҡ эргәһендәге яуҙарҙа Ҡаранайҙың Ларионовҡа ҡаршы һуғышыуы күҙәтелмәй, бер генә документта ла уның исеме телгә алынмай. Үҙенән һорау алғанда ла Ҡаранай 1774 йылдың март-апрелендәге хәрәкәттәре тураһында өндәшмәгән. Хәрби коллегия сәркәтибе М.Д.Горшковтың Торновҡа 1774 йылдың 19 мартында яҙған хаты — Ҡаранайҙың исеме телгә алынған берҙән-бер документ, унда «...полковник әфәнде Ҡаранай Моратовҡа баш эйеп сәләмләүемде тапшырығыҙ» тиелгән.[68] Әммә был хәҙер инде юҡҡа сыҡҡан Минзәлә баш күтәреү төбәгенең баш етәксеһенә ихтилал үҙәгенең әүәлге ихтирамының ауазы булыуы ихтимал.

Үрҙә бәйән ителгәндәр шундай уйға килергә булышлык итә: Берда үҙәгенән ҡайтҡас, ғорур башҡорт юлбашсыһы, Пугачев менән Зарубин эмиссарҙары араһындағы беренселек өсөн ваҡ ығы-зығыға ҡыҫылырға теләмәйенсә, үҙаллы баш күтәреү эшмәкәрлеген алып барған. Сығанаҡтар, һис һүҙһеҙ, шуны раҫлай: ул көрәште туҡтатмаған, провинция канцелярияһына ғәйебен танып бармаған, эшләгән эшенә үкенмәгән. Башҡаса булыуы ла мөмкин түгел, һәм уның ҡан тамырҙарында бөйөк Алдар батыр ҡаны аҡҡанға ғына ла түгел, ә аҙағынаса, бар күңелдән Пугачевҡа түгел, ә батша Петр Федоровичҡа хеҙмәт иткәненә ышанғаны өсөн ул ихтилалға һуңғы һулышынаса тоғролоҡ һаҡлаған.

1774 йылдың яҙында Ҡаранайҙың башҡа башҡорт етәкселәре менән бергә Бөрө янындағы урмандарҙа йәшеренеп, майор Тютчев менән Дувеның язалау командаларына, «тоғро» мишәр старшиналары Әбләй Смаилов, Миндәй Төпәев, Солтанморат һәм Бәхтейәр Янышевтарға ҡаршы берҙәм көрәш алып барыуы сығанаҡтарҙа дәлилләнмәй. Бәхтейәр Ҡанҡаевтың 1774 йылдың майында Ҡаранайҙың Солтанморат Янышевты эҙәрлеклəүе, ә Солтанмораттың Бөрө тирәһендә хәрәкәт итеүе тураһындағы хәбәре ышандырмай,[69] сөнки кеше һүҙенән бәйән ителгән. Сөнки Бөрө эргәһендә Ҡаранай түгел, ә Бәхтейәр үҙе хәрәкәт иткән. Дөрөҫөрәге, 1774 йылдың яҙында, баш күтәреүсе төп көстәр еңелгәс, хәрби һәм граждандар властары еңеү тойғоһонан иҫергән буталсыҡ мәлдә Ҡаранай өйөндә көс йыйып ятҡандыр. Сөнки 1774 йылдың майында ул баш күтәреү эшмәкәрлеген ҡабаттан йәнләндерә.

Ибраһим Мерәсовтың һәм башҡа баш күтәреүселәр армияһы полковниктарының һәм хәрәкәттең тәүге осоронда әүҙем ҡатнашыусыларҙың хәбәрҙәре күпкә ышаныслыраҡ. Унан һуң, әгәр апрелдә һәм майҙың тәүге яртыһында Ҡаранайҙың хәрәкәттәре тураһында мәғлүмәттәр булмаһа, май аҙағында һәм июнь башында улар бихисап, һәм уның көрәшен бик ентекләп, көнләп өйрәнеп була.

20 майҙа Ибраһим Мерәсев мишәр страшинаһы Мөксин Әбдесәләмовҡа яҙған рапортында хәбәр итеүенсә, «... йөҙ башлығы Ҡаранай Моратов 600-ләп йыйылған ... бур башҡорттар менән» Дим һәм Ашҡаҙар йылғалары бассейндарында хәрәкәт итә.[70] Шуны билдәләп үтергә кәрәк,

Бөрө урмандарынан Бәхтейәр түгел, ә Ҡаранай йәшәгән Меркет-Мең олоҫона күрше урынлашҡан Өршәк-Мең олоҫо старшинаһы хәбәр итә. Тимәк, Ҡаранай үҙенең баш күтәреү эшмәкәрлеген үҙе йәшәгән ерҙәрҙә тергеҙеп ебәргән. Һәм ул май аҙағынан күпкә алдараҡ эш башлаған, сөнки май айында уның 600 кешелек отряды хәрәкәт иткән. Был ашығыс йыйылған төркөм түгел, ә тәжрибәле яугирҙарҙың хәрби әҙерлекле отряды булған. Шул уҡ рапортта, Ҡаранай «Ашҡаҙар пристаненән Бөгөлмәгә юл тотоусы өс йөҙ гусарға Дим йылғаһына яҡын Кәркәле ауылында һөжүм иткән, бер урында ҡырҡлаған кешене юҡ иткән», тиелгән.[71] Ҡаранай Дим йылғаһы бассейны башҡорттарын ихтилалға күтәреүен дауам иткән. Ибраһимды артабан тыңлайыҡ: «Һәм тирә-яҡта йәшәүсе старшиналарҙы үҙенә иптәшлеккә шундай янауҙар менән саҡыра: берәй олоҫ халҡы уны тыңламаһа, ундайҙарҙы йыйылған 300 ҡалмыҡ һәм 600 башҡорт менән барып һәр ауылда ҡырасаҡ, ә етәкселәрен аҫасаҡ».[72]

Өфө провинцияһы канцелярияһына 22 майҙа ебәргән рапортында Ибраһим Мерәсев Ҡаранайҙың гусарҙар менән бәрелешеүен ентекләберәк яҙа: «...Бөрйән олоҫоноң хыянатсыл етәксеһе йөҙ башлығы Ҡаранай Моратов үҙе йыйған ҡасҡын һәм юлдан яҙған 600 кешеһе менән, ҡасҡын 300 ҡалмыҡты үҙҙәренә иптәшлеккә алып, Стәрлетамаҡ пристаненән Бөгөлмәгә юл тотоусы 300 гусарға Дим йылғаһындағы Кәркәле ауылы янында һөжүм итеп, Ашҡаҙар йылғаһы буйлап Мырҙалар исемле башҡорт ауылына тиклем ҡыуып алып китте, гусарҙар ундағы мәсеткә инеп ҡасып, дошманға ҡаршы ҡоралландылар, үҙҙәрендә булған дүрт туптан һәм мылтыҡтарҙан ут астылар. Ә ул, бур Ҡаранай, уларҙы пристангә үткәрмәйенсә, ҡамап алып, шунда тотто».[73] Шунда уҡ, 22 майҙа, Өфө провинцияһы канцелярияһына мишәр старшиналары Миндәй Төпәев менән Әбләй Смаилов мөрәжәғәт итә: «18 майҙа пристандән командаһы менән майор ҡуҙғалды, уның артынан танылған бур Ҡаранай үҙе һымаҡ бурҙар менән һәм былтыр ҡышын заводтарҙы һәм баяр йорттарын бергәләп талап йөрөүсе Юрматы һәм Тамъян олоҫо башҡорттары менән, 60-лаған ҡалмыҡ та улар менән бергә булған, ҡыуып етеп, ауыл эргәһендә ҡырып һала, ҡалғандары ҡасып ҡотола».[74] Был мәғлүмәттән күренеүенсә, уның баш күтәреүселәр отрядының нигеҙен Бөрйән, Тамъян һәм Юрматы олоҫтары башҡорттары тәшкил иткән, улар менән Ҡаранай 1773—1774 йылдарҙың ҡышында Минзәлә баш күтәреү төбәгендә хәрәкәт иткән.

Әлбиттә, ихтилал баш күтәреүселәрҙең тик тантаналы еңеүҙәренән генә тормаған. 18 майҙа Ҡаранай регуляр ғәскәрҙәрҙән еңелә, әммә отряд хәрби әҙерлеген юғалтмай һәм көс туплауын дауам итә. Шул уҡ рапортта, Миндәй һәм Әбләй, Ибраһим Мерәсевтың мәғлүмәтенә таянып, «үрҙә телгә алынған Ҡаранай Дим һәм Өршәк буйҙарында йәшәгән старшиналарға, командалары менән тиҙерәк килеп етеүҙәрен талап итеп, кешеләр ебәрҙе, килмәһәләр, 600 ҡалмыҡ уның эргәһенә ашығыуын, шуларҙы уларға ебәреп, йорттарын талатыу, ә үҙҙәрен ҡырып бөтөрөү менән янай», тигән борсолоу белдерә.[75] Һәм был «тоғро» старшиналарҙы үлем ҡурҡынысына һала. «Шуға Ибраһим, — тип дауам

итә мәғлүмәтселәр, — ҡурҡышынан үҙенә команда биреүҙе һорай». Мишәр старшиналары үҙҙәре лә властан ярҙам һорай: «Ҡаланан әҙ булһа ла туп менән ҡоралланған командалар, ә бында йыйылған командаларға дары һәм ҡурғаш ебәрегеҙ. Хәрби командаға йәнә бындағы халыҡты саҡыртһағыҙ ине».[76]

«Тоғро» страшиналарҙың мөшкөл хәлен һәм ҡурҡышын уларҙың лидеры Ҡыҙрас Муллаҡаев Өфө провинцияһы канцелярияһына 1774 йылдың 24 майында яҙған рапортында тулы һәм асыҡ сағылдыра: «...Өршәк йылғаһы үрендә йәшәүсе Ҡаранай Моратов үҙенә ҡасҡын ҡалмыҡтарҙы ҡушып, император ғәли йәнәптәренә яманлыҡ ҡыла. Әммә пристандән килгән хәрби командалар уларҙы ҡырғыланы һәм бер нисәһен юҡ итте. Һәм хәҙер ул беҙҙең төбәктә йөрөүсе Пугачев тураһында белешеп, тырышлыҡ күрһәтеп, халыҡҡа зыян килтерергә теләй».[77] Ҡыҙрас дөйөм борсолоу белдерә: «Был яуызды ҡыҫҡа ваҡыт эсендә тоторға тырышыуығыҙҙы һәм беҙҙең халыҡты уның яуыз ниәттәренән ҡотҡарыуығыҙҙы һорайым. Әгәр тотолмаһа һәм, үҙе һымаҡ аҙашҡандарҙы тағы туплап, көсәйһә, уны тотоуы ла ҡыйын буласаҡ... Старшина Әбләй Исмаилов йыйған командаға өҫтәп, уны тотоу өсөн, исмаһам, туптар менән хәрби команда ебәрелһә икән».[78]

Шуныһы ғәжәп, регуляр командалар ярҙамынан башҡа, хатта, «тоғро» мишәр командалары ла, нығытылған пункттар командирҙары ла берләштерелгән көстәр менән дә Ҡаранайға ҡаршы сыға алмаған.

1774 йылдың йәйендә Ҡаранай үҙенең көрәшендә нығытылған урындан тороп һуғышыу алымын рейдтар ысулы менән уңышлы яраштыра. Уның отряды, нигеҙҙә, Дим йылғаһының урта ағымы бассейнында, Ашҡаҙар һәм Стәрле йылғалары буйында хәрәкәт итә. Ҡайһы саҡта ул дөйөм, хәл иткес бурыстарҙы үтәү өсөн башҡа башҡорт етәкселәре менән берләшә, йәиһә күп саҡырымлыҡ араны марш менән үтә. Һәм һәр саҡ уның даны үҙенән алда елдерә.

Ҡаранайҙың май аҙағындағы ажарлы көрәше «тоғро» башҡорт һәм мишәр старшиналарын да, хәрби властарҙы ла борсоуға һәм ҡурҡыуға һала. Мишәр старшиналары Мөксин Әбдесәләмов менән Ишмөхәмәт Сөләймәнов Өфө провинцияһы канцелярияһына 28 майҙа төҙөгән рапортында: «Шуның өсөн, Өфө провинцияһы канцелярияһына хәбәр итеп, үтенеп һорайбыҙ: ул яуызды, башҡорттоң йөҙ башлығы Ҡаранайҙы тотоу өсөн беҙҙең 30 кешелек мишәр командаһына Өфөнән алыҫ түгел Чесноковка ауылындағы регистратор Лутохин командаһына килергә, ә старшина Әбләйгә 250 кешелек командаһы менән Табын тракты буйлап яуыз Ҡаранай кешеләре йыйылған күрһәтелгән пристангә барырға бойоролһон ине»,[79] — тип яҙа. Документтан күренеүенсә, «тоғро» мишәр старшиналары ҡурҡышынан властарға хеҙмәт итергә әҙер була һәм Ҡаранай менән көрәш программаһын тәҡдим итә.

Табын ҡәлғәһе коменданты майор И. Маршиялов комендант канцелярияһы экстрактында теркәүенсә, Ҡаранайҙың өгөтләүселәренең береһе, Асаутамаҡ ауылынан бер сыуаш, 26 майҙа Ҡуғанаҡ ауылында былай тип белдерә: «... старшина Ҡаранайка исеменән татар диалектында

яҙылған хатта, теге ауылдан уға, Ҡаранайкаға, 30 кеше ебәрелһен: килмәһәләр, ауыл яндырыласаҡ һәм юҡ ителәсәк, тиелгән, уны ауылдың йөҙ башлығы Лавсан, кешеләр ебәреп, тапшырған».[80]

Хәрәкәт йәйелдерелә барыу менән Ҡаранайҙың хәрби эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәттәр Өфө провинцияһына һәм Ырымбур губерна канцелярияһына килеүен дауам иткән. Уларҙан күренеүенсә, 1774 йылдың йәйендә Ҡаранайҙы Нуғай юлындағы ихтилалдың башлығы тип иҫәпләгәндәр. 29 майҙа Өфө провинцияһы канцелярияһына килтерелгән татар кешеһе Ҡотломәт Туймәтов шундай күрһәтмәләр бирә: Ишле ауылына 200 кешелек баш күтәреүселәр отряды килде, уларҙың төп етәксеһе мишәр Ҡәнзәфәр Усаев, икенсеһе — яһаҡлы татар Аллағол Аҡаев. Улар Ҡаранай Моратов етәкселегендәге төп төркөмгә барып ҡушыласаҡ һәм 9 меңлек ғәскәр, туптар менән Стәрлетамаҡҡа, артабан Өфөгә ашығасаҡ. Унда улар менән Пугачевтың һәм шулай уҡ ике мең ҡалмыҡ һәм бер мең башҡорто менән Ҡасҡын Һамаровтың ҡушылыуы ихтимал».[81] Ҡаранай отрядындағы 9 мең баш күтәреүсе һәм туптар тураһындағы мәғлүмәт, шулай уҡ уларҙың Өфө янында Пугачевҡа ҡушылыу ниәте арттырылған булһа ла, Ҡаранайҙы бригадир Ҡәнзәфәр кеүек үк ҙур етәксе һәм уның отрядын «төп» ғәскәр тип таныу шик уятмай.

1774 йылдың йәй башында Ҡаранайҙың Нуғай даруғаһы үҙәгендә, Дим, Өршәк, Ашҡаҙар һәм Стәрле йылғалары бассейндарында хакимлыҡ итеүе хаҡында Мөксин Әбдесәләмов менән Ишмөхәмәт Сөләймәнов Өфө провинцияһы канцелярияһына 28 майҙа ебәргән рапортында ентекләп бәйән итә: «... яуыз башҡорт, йөҙ башлығы Стәрлетамаҡ пристане янында нығынып, тракт буйлап пристангә тиклем, Табын ҡәлғәһе ситенә еткәнсе һәм беҙҙең Боҙаяҙ ауылынан 20 саҡырым алыҫлыҡта юл буйына ҡарауылдар һәм атлылар төркөмөн ҡуйып сыҡты һәм беҙҙән алып теге яуыздар трактты киҫкән ергә тиклем үтер юлды япты. Ул яуыздарҙы тотоу өсөн Дим йылғаһы аръяғындағы Тирмә ауылына старшина Әбләйҙән үтенеп, кешеләр ебәрҙек, ләкин ул барманы».[82]

Хатта полковник И.К.Рылеев Санкт-Петербургтан алып килгән карабинерҙар полкы менән Стәрлетамаҡ пристаненә килеп еткәндә лә был хаҡта Өфө провинцияһы канцелярияһына хәбәр итә алмай. 23 майҙа ул һалдат Скоринды Табын ҡәлғәһенән Стәрлетамаҡ пристаненә Ағиҙел йылғаһы буйлап кәмәлә оҙата, сөнки ҡоронан бар юлдар Ҡаранай кешеләренең күҙәтеүендә була. Әммә 26 майҙа Скорин кире әйләнеп ҡайтырға мәжбүр була, сөнки пристангә 15 саҡырым етәрәк уны «яуыз башҡорттарҙың ҡарауылы» туҡтата. Тегеләр быға «мылтыҡтан атырға һәм уҡтар сөйөргә тотона».[83]

Стәрлетамаҡ пристане менән Табын ҡәлғәһе, тимәк, Өфө менән Ырымбур араһындағы бәйләнеште өҙгәс, Ҡаранай полковник П.А.Шепелевтың язалау корпусы хәрәкәт иткән Яңы Мәскәү юлын да күҙәтеүгә алырға тырыша. Өфө провинцияһы канцелярияһына 27 майҙа яҙған рапортында Ҡыҙрас: «Уларҙың ниәте ҙур: Дүсмәт ауылында туҡтаған полковник Шепелевтың ғәскәрен ҡыйратырға һәм Дим йылғаһы буйында

йәшәүсе минең, Ҡыҙрастың, халҡын ҡырырға йыйыналар»,[84] — тип хәбәр итә.

Был тәүәккәл һәм ҡыйыу ниәтен Ҡаранай 18 майҙа Өршәкбаш-Ҡарамалы ауылы янында еңелгәндән һуң бер аҙна-ун көн ваҡыт үткәс ғәмәлгә ашырырға йыйынған. Әммә тәжрибәле яугир Ҡыҙрастың фекеренә ҡолаҡ һалайыҡ әле: ул Башҡортостандың көньяғындағы хәлваҡиғаларҙы ла, Ҡаранай ғәскәренең мөмкинлектәрен дә дөрөҫ баһалай алған. Ҡаранайҙың уңышһыҙлыҡтан һуң бик тиҙ аяҡҡа баҫыуын, яңынан көсәйеүен һәм Нуғай даруғаһы башҡорттарын ихтилалға күтәреүен Ҡыҙрас ысын күңелдән таный. «Тирә-яҡтан барыһын һәм Дим йылғаһы буйлап Ыҡлы, Күл-Мең олоҫтарынан командаларҙы, Ҡыпсаҡ олоҫо башҡорттарын старшина Ҡәйеп Зыямбәтовҡа йыйҙы». Ҡыҙрастың ярҙамсыһы Юламан Ильясов та Ҡаранай янында булып сыға. Хатта Ҡара Табын олоҫоноң Буранғол ауылы башҡорттары Өмөтбай Буранғолов «туғандары, йәмғеһе ете ихата, Ҡаранай менән килешеп, йәнәһе Ҡаранай әйтеп кителгән полковникты үлтерергә, ә Өмөтбай мине, Ҡыҙрасты, юҡ итергә» һүҙ ҡуйышалар. Ә былары инде Ҡыҙрас үҙе бик күп тиҫтә йылдар старшина вазифаһын үтәгән Ҡара Табын олоҫо башҡорттары. Әлбиттә, Ҡыҙрастың ҡото оса. Һәм Өфө провинцияһы канцелярияһына: «Уларҙың һүҙ ҡуйышыуын уйлап, был яуыздар көсәймәҫ борон провинция канцелярияһының уларҙы тиҙерәк тотоп алыуын үтенәм. Әгәр тотолмаһалар, халыҡты һәләкәткә илтәсәктәр»,[85] — тип ялына.

Башҡорт йәмғиәте һуғышыусы ике лагерға бүленә башлай. Үлә яҙып ҡурҡҡан «тоғро» старшиналар ғаиләләрен хөкүмәт ғәскәрҙәре тупланған урындарға күсерә. Ә ябай башҡорттар ихтилалсылар яғына ауыша. Хөкүмәт агенты татар Ғөбәйҙулла Ураҙаев полковник Н.Н.Кожинға ебәргән рапортында былай тип киҫәтә: «...башҡорт халҡының хәлен һиҙәм: атҡа атланып, яуыздарҙы тотабыҙ, тип, Дим йылғаһы аша икенсе яҡҡа йүнәләсәктәр. Тик уйҙарында ул түгел: мөмкинлектәре булһа, бер нисә Рәсәй полкын ҡыйратып, Ағиҙел буйындағы башҡорттарға барып ҡушыласаҡтар».[86]

1774 йылдың йәй башы тотош Башҡортостан территорияһында халыҡ ихтилалының яңы ҡеүәтле күтәрелеше менән билдәләнелә. Иҫәт провинцияһының башҡорттарын, завод эшселәрен һәм крәҫтиәндәрҙе, рус булмаған халыҡтарҙы ихтилалға күтәреп, Пугачев Төп ғәскәре менән Башҡортостанда Көньяҡ Урал буйлап етеҙ хәрәкәт итә. 2 июндә Төп ғәскәргә Салауаттың атлы сиреүе ҡушыла. Мәсәғүт ауылы эргәһендәге яуҙан һуң Пугачев 5 июндә Салауат менән Белобородов оҙатыуында төньяҡ Башҡортостан аша, был төбәк халҡын ихтилалға күтәреп, Ҡазанға йүнәлә. Ул арала Урал аръяғының көньяғында баш күтәреүсе башҡорт отрядтары ҡәлғәләргә һәм заводтарға һөжүм итә. Бөрйән олоҫо старшинаһы Төркмән Йәнсәйетов, Түңгәүер олоҫоноң йөҙ башлығы Юлдыбай һәм Үҫәргән олоҫоноң отставкалағы старшинаһы Сабир Ҡотлонбәковтарҙың ҡатнаш отряды Уртаҙым ҡәлғәһен яулап ала. Улар элекке һалдаттарҙы һәм ихтилалға ҡушылмаусыларҙы ҡырып һала, йорттарын яндыра; ҡәлғәнән ике баҡыр туп, 15 бот дары алып сыға.[87] 3

июндән алып Йылайыр ҡәлғәһе оҙайлы ҡамауҙа ҡала. Коллегия советнигы И.Л.Тимашев ҡамаусы башҡорт отрядтарына ҡаршы йәнтәслим һуғыша. Бөрйән, Түңгәүер, Үҫәргән һәм Ҡарағай-Ҡыпсаҡ олоҫтары башҡорттарынан тыш, ихтилалсылар араһында казактар, ҡалмыҡтар һәм завод крәҫтиәндәре була. Баш күтәреүселәр Преображенск заводын баҫып алып, яндыра.[88] Баш күтәреүселәр отрядтары Башҡортостандың көньяғында хәрәкәт итә, Яңы Мәскәү юлы буйлап язалау командаларына һөжүм итә.

4 июндә Арыҫлан Ранғолов, Бүләк Яҡупов һәм Алладин Феляков отрядтары Бөрө ҡалаһын ҡаты һөжүм менән ала. Ихтилал юлбашсылары тарҡау рәүештә Өфө төбәгендә көстәрҙе берләштерергә ынтыла. Провинцияның хакимиәт үҙәгенә етди ҡурҡыныс янай. 16 июндә Өфө коменданты полковник С.С.Мясоедов тағы бер тапҡыр язалау ғәскәрҙәренең баш командующийы бурыстарын башҡарыусы генерал-поручик Ф.Ф.Щербатовҡа туптар менән ғәскәри командалар ебәреүен һорап мөрәжәғәт итә, юғиһә «яуыздарҙан янаған хәүеф торған һайын арта бара, һәм, күренеүенсә, Өфө ҡалаһына өс яҡтан — Нуғай, Уса һәм Себер даруғаларынан ынтылалар».[89]

25 июндә Мясоедов Михельсондың рапорты аша Пугачев менән Салауаттың Өфөгә барырға ниәтләнеүе хаҡында дөрөҫ булмаған мәғлүмәт ала.[90] Шул уҡ көндө Мясоедов, Өфөгә көньяҡтан ҡурҡыныс янауын белдереп, Рейнсдорпҡа рапорт ебәрә. Пугачев менән Салауат был ваҡытта Башҡортостандың төньяғында булһа ла, ҡурҡыныс Өфөгә, ысынлап та, көньяҡтан яҡынлаша. Өфөнән 50 саҡырым көньяҡтараҡ өс меңлек ҡатнаш отряд туплана. Отрядта шулай уҡ мишәрҙәр һәм яһаҡлы татарҙар ҙа була. Әбдей Тләүкәлевтың хәбәр итеүенсә, баш күтәреүселәр Өфөгә барырға ниәтләнә. 27 июндә Амантай ауылы эргәһендә, Чесноковканан алыҫ түгел, был отряд полковник Л.Я.Якубовичтың язалау корпусы менән яуға инә.[91] Баш күтәреүселәр ҡот осҡос еңелеүгә осрай, 2 мең самаһы башҡорт шәһит була.[92] Ҡатнаш отрядҡа Аҡкөсөк Таиров, Ишкинә Әйесов, Мораҙым Абдрахманов, Үтәгән Муалиев һәм Нуғай даруғаһының башҡа башҡорт старшиналары етәкселек итә.

Нуғай даруғаһындағы ваҡиғалар ҙа дөйөм халыҡ күтәрелеше шарттарында йәйелдерелә. «Тоғро» башҡорт старшиналары халыҡ баҫымы аҫтында баш күтәреүселәр яғына сығырға мәжбүр була һәм хатта хәрәкәткә ваҡытлыса етәкселек итә. Хәрәкәт шундай киң биләмәләрҙе ялмап ала — Татищев ҡәлғәһе һәм Һаҡмар ҡалаһы янында Пугачевтың Төп ғәскәрен ҡыйратҡан генерал Голицындың язалау корпусына Ырымбурҙан Өфөгә барып етеү өсөн айҙан ашыу ваҡыт кәрәк була. Ырымбурҙан 5 июндә сығып китеп, корпус Өфөгә 12 июлдә генә килеп етә. Хәрби һәм граждандар власы Голицындың корпусына ҙур өмөттәр бағлай. Язалау ғәскәрҙәренең баш командующийы генерал Ф.Ф.Щербатов 4 июлдә Голицынға бойороҡ ебәреп, «Өфөгә килеүҙе ашыҡтырыуын һәм үткәндә Ағиҙел буйын таҙартыуын, Ырымбур менән Өфө араһында бәйләнеш булдырыуын» талап итә.[93]

Әммә Голицындың корпусына бөтkөhөҙ hөжүмдәргә ҡаршы тороп, бер туҡтауһыҙ яуға инеп, ысын мәғәнәһендә дәһшәтле һыҙат аша үтергә тура килә. 13 июлдә Щербатовҡа ебәргән рапортында Голицын: «Тиҙләтелгән марш менән атлап, кешеләр һәм аттар был яҡтарҙа айырыуса һиҙелерлек эҫенән хәлдән тайһалар ҙа, 4 июлдә бирелгән бойороҡто үтәргә бар көсөмдән тырыштым. Әммә минең юлымда яуыздар өймәкләшеүенән күп туҡтарға тура килде, улар бихисап булып, беҙҙе өҙлөкһөҙ ҡамауҙа тотоп, Стәрлетамаҡ пристанендә һәм Табында булдырылған бәйләнеште өҙҙөләр».[94]

5 июлдә Стәрлетамаҡ эргәһендә ҡупҡан яу мөһим әһәмиәткә эйә була. Баш күтәреүсе башҡорттарҙың ике мең кешелек ҡатнаш отряды марш менән атлауы Голицын корпусының һул колоннаһына юл ыңғайы һөжүм итә. Артиллерия һәм атыу ҡоралы менән яҡшы тәьмин ителгән, гусар полктары һәм Дон казактары менән көсәйтелгән күп меңлек регуляр корпусҡа баш күтәреүселәрҙе тар-мар итеүе ҡыйынға тура килмәй. Һуғыш яланы ҡурҡыныс күренеште күҙ алдына баҫтыра. Баш күтәреүсе башҡорттар ҡасып ҡотолорға мәжбүр була. Язалаусыларҙың атлы ғәскәре уларҙы 40 саҡырым баҫтырып бара. Азатлыҡ көҫәп ихтилалға күтәрелгән ирек һөйөүсән башҡорт халҡының иҫ киткес ҡыйыулығы, һоҡланғыс батырлығы, фиҙакәрлеге, өммәтенең бәхете хаҡына хатта йәненән ваз кисеүе, һуңғы тамсы ҡанына тиклем һәм һуңғы көсөнәсә, һуңғы яуғаса бирелмәүсәнлеге таң ҡалдыра.

Голицын ҙур ҡәнәғәтләнеү менән һуғыштың нисек тамамланыуын тасуирлай: «Ҡаушап ҡалған башҡорттар ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн Ағиҙелгә ташландылар, әммә кисеүҙе тапмайынса, йөҙөп киттеләр. Түҙеп торғоһоҙ эҫенән ҡыҙған аттар көслө ағымлы йылғаны йөҙөп сыға алманы. Күпселек батып үлде, ә ҡалғандары теге ярға сыҡҡас юҡ ителде...»[95] Яу яланында 320 шәһиттең мәйете ятып ҡала; бынан тыш, полковник Денисовтың рапорты буйынса, күбеһе йылғала батырыла һәм күп кенәһе икенсе ярҙа үлемдән ҡотолоп ҡала. 28 кеше әсир ителә».[96]

Баш күтәреүселәр лагерына әйләнеп килгән Әлибай Мырҙағолов, Ибраһим Мерәсев, Ҡәйеп Зыямбәтов, Илсеғол Таймасов, Аслай Ҡурмаҡаев һәм Ҡыҙрас Муллаҡаев ҡатнаш отрядҡа етәкселек итә. Тәжрибәле хәрби етәкселәр була тороп та, улар, башҡорт атлыларының ҡәҙимге партизандар алымын ҡулланмайынса, яҡшы ҡоралланған регуляр армияға йән асыуы менән дәррәү ташлана һәм, тар-мар ителеп, ҙур юғалтыуҙар кисерә. Крәҫтиәндәр һуғышы барышында бер генә башҡорт отряды ла шулай дыуамалланып яуға инмәгән һәм шундай ҙур еңелеү кисермәгән.

Ул арала Ҡаранай язалаусылар һәм «тоғро» старшиналар менән көрәште дауам иткән. Ҡатнаш отряд 5 июлдә Голицын корпусы менән алышҡанда Ҡаранай Стәрлетамаҡ пристане эргәһендә торған. 7 июлдә Өфө провинцияһы канцелярияһы Рейнсдорпҡа ебәргән рапортында, «дүрт көн элек бур, йөҙ башлығы Ҡаранай Моратов, Стәрлетамаҡ тоҙ пристане янында, үҙе һымаҡ һигеҙ йөҙләгән бур башҡорттарҙы эргәһенә йыйып, Ашҡаҙар һәм Стәрле ауылдарын яндырҙы, ә пристанде ҡамауға алды»,[97] тип хәбәр итә.

Ҡаранайҙың Стәрлетамаҡ эргәһендәге хәрби хәрәкәттәрен генерал Голицын да раҫлай. Үрҙә әйтеп кителгән рапортында ул, «полковник Шепелев әфәнденекен дә, подполковник Рылеевтыҡын да деташаменттарын тапманым, ә гарнизонда ҡалдырылған отставкалағы капитан Мельников ҡораллы йөҙ кешеһенән дә, өс тубынан да яҙған, айҙың 1-се һәм 2-се көнөндә ул яуыздарҙың ике һөжүмен үткәргән»,[98] тип яҙа. Шепелевты язалау корпусы менән Голицын Табында тап итә. Тимәк, Голицын корпусы килгәнгә тиклем Стәрлетамаҡ пристане районында Ҡаранай хакимлыҡ иткән, ә 1 һәм 2 июлдә пристанде һөжүмгә тотоуҙар Өфө провинцияһы канцелярияһының мәғлүмәттәренә тура килә.

Пугачевтың Ҡазанға яу менән барыуы тураһындағы хәбәр Башҡортостан халыҡтарына килеп етеү менән бик күп баш күтәреүселәр отрядтары, бигерәк тә көнбайыш олоҫтарҙан, уға ҡушылырға ашыға. Тап Көнбайыш Башҡортостан халыҡтарының туҡтауһыҙ ағылыуы иҫәбенә Төп ғәскәр яугирҙарының һаны һанаулы көндәрҙә 20 мең кешегә етә. Үҙәк Башҡортостандан Төп ғәскәр менән берләшергә тип ике меңлек ғәскәре менән Ҡаранай ашыға.

Ҡаранайҙың Стәрлетамаҡ пристаненән көнбайышҡа ҡасан ҡуҙғалыу ваҡытын архив сығанаҡтары буйынса билдәләүе ҡыйын. Пристанде баҫып алыу ниәте тормошҡа ашмаҫын белгәс китеүе ихтимал, сөнки Голицын Стәрлетамаҡ гарнизонында Шепелев командаһына — 300, Табында 170 кеше ҡалдыра, уларҙы етерлек артиллерия менән ҡоралландыра, «яланда нығытмалар төҙөргә ҡушыла, ә ҡалған ғәскәрҙән обсервация деташаментын төҙөү ҡарала, ул ҙур ғына кавалериянан һәм бер мең йәйәүленән тора».[99]

Кама йылғаһында Балыҡлы биҫтәһе районында хәрәкәт итеүсе есаул Гаврила Лихачев 16 июлдә «полковник Ҡаранай Моратович әфәндегә» рапорт менән мөрәжәғәт итә. Рапорттан Ҡаранай отрядынан атлы казактарҙың 16 июлдә Лихачевҡа килеп, Ҡаранайҙың «Ҡазан өйәҙе Янһары ауылында нығыныуын хәбәр итеүе мәғлүм. Есаул Ҡаранайға «армияларҙы ҡушып, Ҡазанға юлланыу өсөн нисек тә ашығырға» тәҡдим итә.[100]

Шулай итеп, июль уртаһында Ҡаранай 2 мең кешелек отряды менән Кама буйында Балыҡлы биҫтәһендә пәйҙә була һәм, Кама аша сығып, Төп ғәскәргә ҡушылырға йыйына. 22 июлдә Бәхтейәр Лихачев менән бергә Хәрби коллегияға яҙған рапортта, Әр юлында йәшәүселәр хәбәр итеүенсә, Кама ярына Ҡаранай армияһы яҡынлашты, «күп һанлы», Ҡаранай Кама аша сығып, «батша» армияһына ҡушылырға теләй, тик Кама аша сыға алмай, тиелгән.

Шул уҡ көндө, 22 июлдә, баш күтәреүселәр полковнигы Бәхтейәр Ҡанҡаев Ҡаранайҙы «үҙенең армияһы менән тиҙерәк дөйөм армияға килеп ҡушылырға» ашыҡтырып, хат яҙа. Ә «беҙҙең батюшка, ишетелеүенсә, Ҡазандан марш менән килә...», ти.[101]

Ҡаранай отрядының Камаға табан хәрәкәт итеүе тураһында Бәхтейәргә Лихачев та хәбәр итә. 24 июлдә ул былай тип яҙа: «...Себер яғынан ғәли йәнәптәренә, беҙҙең батюшкаға ярҙамға, 20 мең кешелек армия килә».[102] 1773—1774 йй. Крәҫтиәндәр һуғышының тарихы буйынса архив сығанаҡтары белгесе, ҙур ғалим Р.В.Овчинников, Көнбайыш Кама

аръяғында Балыҡлы биҫтәһе төбәгендә Ҡаранай менән бергә Ҡәнзәфәр һәм башҡа ихтилал етәкселәре лә булған, тип раҫлай.[103] Беҙҙә быны дәлилләүсе материалдар юҡ, әммә Бәхтейәр Хәрби коллегияға ебәргән рапортында, «Петр Федорович император ғәли йәнәптәренең дошмандарына ҡаршы тороу өсөн йыйылыусы ғәскәрҙәрҙе ысынлап та күрҙек, уларҙың етәкселәренән баш атаман Ҡаранай Моратовты һәм иҫәпһеҙ-һанһыҙ ғәскәрҙәре менән башҡа командирҙарҙы күрҙек», тип яҙа.[104] Беҙҙең өсөн шуныһы әһәмиәтле: Көнбайыш Башҡортостан халыҡтары өсөн Ҡаранай «баш атаман» булып ҡалған, ә Көнбайыш Кама аръяғында башҡорттарҙың ҡатнаш отрядының хәрәкәт итеүе Ҡаранай яуы тип ҡабул ителгән. Ысынында был Стәрлетамаҡтан Камаға йүнәлтелгән рейд булған. Уның отрядының Көнбайыш Башҡортостанда күренеүе халыҡты ҡуҙғытып ебәргән, был төбәктә йәшәүселәр уға ҙур өмөттәр бағлаған һәм көрәшкә яңынан дәррәү күтәрелгән, Пугачевтың Төп армияһын тулыландырған, айырым отрядтар йыйған һәм үҙаллы хәрәкәт иткән.

12, 13 һәм 15 июлдә Ҡазан эргәһендәге Әр яланында Пугачевтың Төп ғәскәре менән Михельсондың язалау корпусы яуға инә. 25 мең кешелек армияһын юғалтып, Пугачев ҡаса һәм 17 июлдә Волганың уң яҡ ярына сыға. Шулай итеп, 22 июлдә Камаға яҡынлашҡан Ҡаранай Пугачев менән ҡушылырға һуңлаған. Кама аша сыға алмайынса, ул үҙенең отряды менән Стәрлетамаҡ пристаненә әйләнеп килгән. Был ваҡытта Уса яғынан Башҡортостанға ҡайтҡан Салауат, Ҡәнзәфәр, Ҡотлогилде, Һеләүһен һәм башҡа хәрби етәкселәр Өфөгә ҡатнаш яу әҙерләй башлаған.

Нуғай даруғаһына әйләнеп килгән Ҡаранай ҙа оло яуға әҙерлек башлағандыр, күрәһең. Ҡәнзәфәр Бөгөлмәлә 4 августа яуап тотҡанда шундай яу әҙерләнеүен әйткән һәм ойоштороусыларын һанап киткән. Әммә улар араһында Ҡаранайҙы атамаған.[105] Ҡәйеп Зыямбәтов менән Ибраһим Мерәсевтың мишәр старшинаһы Ишмөхәмәт Сөләймәновҡа 24 июлдә Ҡаранай, Ҡанбулат, Ҡотлогилде һәм Һеләүһендең Ҡандракүл йылғаһы үрендәге берлектәге хәрәкәттәре тураһында хәбәр итеүе бер аҙ аптырата.[106] «Тоғро» башҡорт старшиналары был хаҡта насар хәбәрҙар булғандыр, күрәһең. 22 июлдә Камала Балыҡлы биҫтәһендә тороусы Ҡаранай ике көн эсендә Башҡортостандың көньяғына ҡайтып етә алмаған. Өфө провинцияһы канцелярияһы, мәғлүмәтселәренең хәбәрҙәренә таянып, 24 июлдә Ҡаранайҙың Ашҡаҙар һәм Ағиҙел буйында хәрәкәт итеүе тураһында шулай уҡ яңылыш мәғлүмәт таратҡандыр.[107] Ләкин Кама буйҙарынан ҡайтҡан Ҡаранай йәнә Нуғай даруғаһының баш күтәреүсе башҡорттарының юлбашсыһына әйләнә — быға хатта язалаусылар ҙа шикләнмәй.

1774 йылдың йәй аҙағында һәм көҙөн Башҡортостан территорияһында ихтилал һүрелә башлай. Илде язалаусы ғәскәрҙәр баҫып ала, «тоғро» башҡорт һәм мишәр старшиналары әүҙемләшә. Һөнәрмәндәр һәм завод эшсәндәре, казактар, рус крәҫтиәндәре һәм рус булмаған халыҡтар хәрәкәттән ситләшә. Башҡорт баш күтәреүселәре язалау машинаһы алдында яңғыҙ ҡала. Артабан баш күтәреүселәр отрядтарын ҙур ғәскәрҙәргә, армияларға туплап, ойошҡан рәүештә көрәш алып барыуға иҫәп тотоп булмай. Шуға күрә ихтилалсы башҡорттарҙың

айырыуса тоғро юлбашсылары партизандар һуғышына күсә. Улар ғаиләһен, мал-тыуарын, башҡа торлаҡ кәрәк-яраҡтарын урмандарға, тауҙарға алып китеп, үҙҙәре ҙур булмаған отрядтар менән форпостарға һәм редуттарға, ылауҙарға һәм ваҡ хәрби берләшмәләргә һәм «тоғро» старшиналар командаларына ҡурҡыуһыҙ һөжүм яһай, малдарын һәм аттарын ҡыуып алып китә. Һәм улар 1774 йылдың ҡара көҙөнә тиклем тотош Башҡортостанды көсөргәнешлектә тота. 1774 йылдың йәй аҙағында — көҙөндә «самозванец Пугачевтың иң төп енәйәттәштәренең береһе» Ҡаранайҙы тотоу — ә уны асыҡ яуҙа язалаусылар ҙа, «тоғро» старшиналар ҙа еңә алмай — хәрби властарҙың һәм түрәләрҙең төп хәстәрлеге була. 1 июндә үк Бөгөлмә гарнизоны командиры полковник Н.Н.Кожин генерал Щербатовҡа яҙған рапортында, Ҡыҙрас Муллаҡаев «башҡа иң яҡшы старшиналарҙы» үҙенә саҡырып, башҡорт йолаһы буйынса өс ат һуйып ҡунаҡ иткән һәм «Башҡортостандың был төбәгендәге төп бур һәм ҡотҡо һалыусы башҡорт Ҡаранай Моратовты тотоу өсөн иң яҡшы ысул эҙләп кәңәшләшкән», яуыздарҙы ҡыйратыуҙа булышлыҡ итеү өсөн ике старшинаны полковник әфәнде һәм кавалер Шепелевҡа ебәргән, улар беҙҙе тиҙҙән уңыштары менән ҡыуандырырҙар, тип өмөт итәм» тип хәбәр итә.[108] Әммә, ваҡиғалар күрһәтеүенсә, халыҡ ихтилалы дөрләгәндә Ҡаранайҙы тотоу ниәте уңыш ҡаҙанмай.

Һәм шул уҡ Ҡыҙрас язалаусы генералдар менән берлектә август уртаһында йәнә Ҡаранайҙы тотоу тәҡдиме менән сығыш яһай. 17 августа Ҡазан Йәшерен комиссияһы начальнигы генерал П.С.Потемкин императрица Екатерина Икенсегә яҙған белдермәһендә: «...Ҡыҙрас старшинаға Ҡаранай менән Салауатты тоторға бойороп, миҙал ебәрҙем һәм һәр береһе өсөн йөҙәр һум аҡса вәғәҙә иттем»,[109] тип яҙа. Әммә ул был юлы ла хөкүмәт алдындағы бурысын үтәй алмай. Ҡаранай көрәште дауам итә.

Ҡышҡа табан, 24 октябрҙә Ырымбур губернаторы Рейнсдорп Панинға ебәргән рапортында, «Пугачевтың юлдан яҙған старшиналары Ҡаранайҡа, Муйнаҡ, Ҡасҡын, Ҡотлогилде йорттарынан сығып киткәндәр»,[110] тип яҙа. Нуғай даруғаһының танылған башҡорт юлбашсылары нисек итеп барыһы бер юлы Урал аръяғына юлыҡҡандыр — әйтеүе ҡыйын. Күрәһең, улар Таулыҡай ауылында кәңәшмәгә йыйылғандыр — коллегия советнигы Тимашев уларҙы шунда ҡулға ала ла инде. Ҡасҡын һәм Ҡотлогилде тураһындағы очерктарҙан уҡыусы Нуғай даруғаһы башҡорттарының һуңғы етәкселәренең нисек тотолоуын яҡшы белә. 25 октябрҙә Тимашев Кинйәбулат Әлкәшевты, Ҡотлогилде Абдрахмановты, Морат Әптәловты, Таулыҡай Бураҡовты, Ҡасҡын Һамаровты, Мөйнәк Һөләймәновты, Төркмән Йәнсәйетовты һәм Ҡаранай Моратовты ҡулға алыуы тураһында Рейнсдорпҡа хәбәр итә.[111]

Тимашев алдына ҡатмарлы мәсьәлә килеп баҫа: ҡулға алынғандар менән ни эшләргә? «Уларҙы миңә бәйләп килтерҙеләр, ҡаты ҡарауылда тотам», — тип яҙа ул губернаторға һәм «һеҙҙең ғәли йәнәптәренән резолюция көтәм», тип вәғәҙә бирә. Триумфатор уларҙы Ырымбурға Башҡортостан аша ебәрергә ҡурҡа һәм Силәбе, Екатеринбург, Көңгөр аша Ҡазанға оҙатырға тәҡдим итә. Уларҙы айырым күрһәтмә килгәнсе үҙендә тоторға була, «мал аҙығы һәм ылау эҙләүҙә кәрәктәре тейер», ти.[112]

Әммә тиҙҙән Тимашев Ҡасҡын менән Ҡотлогилдене Шайтан-Көҙәй олоҫона Юлайҙы властарға бирелергә өгөтләргә, ә Ҡаранайҙы генерал Потемкиндың талап итеүе буйынса Ҡазанға ебәрә. Ҡаранайҙы Ҡазан Йәшерен комиссияһына алып барыу тарихы ҡыҙыҡлы. Тимашев тәүҙә был мәсьәлә менән губернатор Рейнсдорпҡа мөрәжәғәт итә. Губернатор Ҡаранайҙы Үрге Яйыҡ ҡәлғәһенән Ҡазанға Ырымбур һәм Сембер аша оҙатырға кәңәш итә. Ҡаранайҙың абруйы шул тиклем юғары була, унан хатта язалаусылары ҡурҡа һәм генерал Потемкинға «белдермәләр менән ебәрелә» тип оҙатыла. Ҡаранайҙы Тимашев белдермәһен граф Панинға илтеүсе Ҡарғалы татары оҙатырға тейеш була.[113] Тимашев ниңәлер Ҡаранайҙың ғәйебен һиҙелерлек йомшартырға ҡарар итә. Рапортында ул: «был яуыз... минең саҡырыуым буйынса үҙе килде...», Ҡазанға үҙе теләп барырға булды, тип яҙа. Тимашев Потемкинға: «әгәр һеҙ ғәли йәнәптәренең ҡарары буйынса ул шәфҡәтлеккә лайыҡ булһа, ҡайтҡас, һуғышҡаҡ һәм тыйнаҡһыҙ халҡын тынысландырыр ине»,[114] — тип тәҡдим итә. Язалаусы бер ҡатлылыҡ менән Ҡаранайҙың халыҡ араһында киң танылыуын ихтилалды баҫтырыуҙа файҙаланырға иҫәп тота. Ҡаранай Тимашевтың белдермәһе менән Ҡазанға барып еткәнсе Потемкин борсола, төрлөсә фараз итә, ялған хәбәрҙәргә ышана һәм үҙе лә дөрөҫ булмаған мәғлүмәттәр тарата. Мәҫәлән, 12 ноябрҙә Потемкин Панинға: «Каранайка үлде», — тип хәбәр итә.[115]

Ҡаранай Ҡазанға 1774 йылдың 20 ноябрендә килеп етә. Шул уҡ көндө Потемкин Ырымбур губернаторы Рейнсдорпҡа Ҡазанға «баш фетнәсе» Ҡаранай Моратов килтерелгәнен еткерә.[116] Йәшерен комиссияла Ҡаранай әсир хәлендә һорауҙарға яуап бирә, уны Ҡазан бастругына бикләйҙәр. Әлибайҙың Ҡазан Йәшерен комиссияһына яҙған рапорты Ҡаранайҙың яҙмышын еңеләйтергә ярҙам иткәндер, тип уйларға кәрәк. 1775 йылдың 9 ғинуарында ул Нуғай даруғаһының башҡорт етәкселәрен императрица алдында ғәйебен таныуға килтереү буйынса үҙенә йөкмәтелгән бурыстың үтәлеше хаҡында рапорт бирә. Рапортҡа Әлибай 1774 йылдың ноябрендә уҡ йыйған старшиналарҙың исемлектәре һалына. Рапортҡа өҫтәмә бар: «Полковник Кожин әфәнденең миңә Кинйә Арыҫланов, Ҡаранай Моратов һәм Салауат Юлаев кеүек фетнәсе башҡорт старшиналарын уның ғәли йәнәптәре, генерал-майор әфәнде һәм кавалер Павел Сергеевич Потемкинға ғәйептәрен танып килергә өгөтләргә ҡушҡан бойороғо буйынса Ҡаранай Моратов Ҡазанға үҙе килде...»[117]

Генерал Потемкин Ҡаранайҙы Кинйәне ҡулға алырға ҡушылған йөкләмә аҫтына ҡултамғаһын ҡуйырға мәжбүр итә. Тарихи әҙәбиәттә был осраҡ бер яҡлы яҡтыртыла, шуға Ҡаранай ихтилал эшенә хыянат итеүҙә ғәйепләнә. Был сығанаҡтарҙы насар белеүҙән килә. Шуға күрә, Ҡаранайҙың азатлыҡ көрәшенә аҙағынаса тоғро һәм эҙмә-эҙлекле булыуында шик ҡалмаһын өсөн, был документты киңәйтелгән хәлдә тәҡдим итәбеҙ. «Ул Бошман-Ҡыпсаҡ олоҫо старшинаһы Кинйә Арыҫлановты эҙләп табып, өгөтләп, йәки, ҡаршылашһа, тотоп алып, ике айҙан һуң, әлбиттә, әгәр тере булһа, йәшерен комиссияға оҙатырға, үлһә, шуның ышандырғыс дәлилдәрен йәшерен комиссияға нисек тә тиҙерәк килтереп еткерергә бурыс алып, ҡултамғаһын ҡуйҙы, — тип яҙа Потемкин.

— *Кире осракта, шуны үтәмәһә, үҙен император ғәли йәнәптәренең асыуына һәм үлем язаһына дусар итә». (Курсив беҙҙеке — Н.Ҡ.)*[118] Документтан күренеүенсә, ул үҙ теләге менән түгел, ә үлем язаһы менән ҡурҡытыу аҫтында ҡул ҡуйған. Әммә, ирекке сыҡҡас, Ҡаранай был бурысын үтәү өсөн бер ниндәй сара күрмәгән.

Ҡаранай Пугачевтың ысынлап та батша Петр Федорович булыуына ныҡлап ышанғандыр, күрәһең. 1774 йылдың 28 ноябрендә Потемкиндың күрһәтмәһе буйынса Ҡаранайҙы Ҡазандан Мәскәүгә ялған батшаны язалағанды ҡарау өсөн ебәрәләр. Ҡаранай, ғәфү ителһә лә, властар өсөн ҡурҡыныс фетнәсе булып ҡала әле. Потемкин, Мәскәүгә килгәс, Ҡаранай атаманды Мәскәүгә нисек оҙатырға кәрәклеге хаҡында Ҡазан Йәшерен комиссияһына ентекле инструкция ебәрә. Генерал уның тотҡон сифатында оҙатылыуын белдермәҫкә ҡуша. Шуның өсөн ул Ҡаранайҙы әсир ителгән пугачевсыларҙы оҙатыусы конвой иҫәбенә индерә. Һәм уны баш күтәреүсе Яйыҡ казактары Кузьма менән Семен Фофановтарҙы оҙатыусы конвой командаһында алып баралар.[119] Пугачев болаһы эштәре буйынса йәшерен комиссия начальнигының шаҡ ҡатырлыҡ тапҡырлығы. «Башҡорт фетнәсеһе», атаман Ҡаранай Моратов уны нимәһе менән үҙенә ҡарата алған һуң? Нисек кенә булмаһын, комиссия начальник инструкцияһын анығ үтәгән. Ҡаранай Мәскәүгә фетнәсе түгел, ә тотҡон боласыларҙың конвоиры булараҡ килгән. 1775 йылдың 15 ғинуарында Мәскәүҙең Болотный майҙанында Ҡаранай күп меңлек халыҡ күҙәтеүе аҫтында «крәҫтиәндәр батшаһы Петр Өсөнсөнө» — Пугачевты ҡул-аяғын һәм башын киҫеү аша язалауҙың шаһиты була.

20 ғинуарҙа Потемкин Ҡаранайҙы Ҡазанға, Ҡазан губернаторы кенәз П.С.Мещерский ҡарамағына ебәрә. Ҡазан Йәшерен комиссияһына ебәргән белдермәһендә: «... килеп тыуған хәлдәр Мәскәүҙә тейешле язаға тарттырылған Пугачевтың ялған батша булғанлығына Ҡаранайҙы ышандырыу өсөн уны Мәскәүгә алып килеүҙе талап итте, беренсенән, уны ҡарауыл аҫтында һәм бығаулы хәлдә күреп, ялған идолды, яуыз Пугачевты язалау шаһиты булырға тейеш ине».[120]

Ҡаранайҙың яҙмышы был ваҡытҡа хәл ителгән була. Потемкин Ҡаранайҙы «генерал-поручик әфәнде һәм губернатор, Ҡазан кенәзе Платон Степанович Мещерскийға ебәрергә» күрһәтмә бирһә лә, был исем өсөн генә, чины һәм вазифаһы буйынса өлкән түрәгә ихтирам йөҙөнән генә эшләнә. Йәшерен комиссия тикшереүҙәрҙән һуң үҙенең ҡарарын сығара һәм Потемкин был хаҡта асыҡтан-асыҡ яҙа: «Комиссияға мәғлүм булыуынса, минең саҡырыуыма ярашлы, енәйәтен танып һәм бола сығарыуҙан баш тартып, үҙе минең янға Ҡазанға килеүсе башҡорт Ҡаранай бынан оҙатыла. Ә мәрхәмәтле император ғәли йәнәптәренең манифесына ярашлы, кем ғәйебен таный, тәүбәгә килә, шул ярлыҡау ала һәм ғәфү ителә, шуға күрә был енәйәтсе лә үҙенең буйһоноуы менән [язанан] ҡотолдо».[121] Ошо факттарҙан күренеүенсә, генерал Потемкин, ни сәбәплелер, эҙмә-эҙлекле рәүештә Ҡаранайҙы ҡотҡарыу өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләй.

Ҡаранайҙы Йәшерен комиссиянан азат итеү ваҡыты билдәле түгел. Әммә уның тулыһынса аҡланып, иҫән-һау өйөнә ҡайтыуы билдәле.

80-се йылдарҙа ул Бөрйән олоҫоноң йөҙ башлығы булып хеҙмәт итә. 1783 йылдың 17 ноябрендә Ыҡ буйындағы ерҙе секунд-майор А.П. Мансуровҡа һатыуҙа ҡатнаша.[122] Ҡаранай 1788 йылда ла үҙ олоҫоноң йөҙ башлығы булып ҡала һәм 1 ноябрҙә Нуғай даруғаһы башҡорттарының Һалмыш йылғаһы буйындағы ерҙәрен Ҡарғалы (Сәйет) биҫтәһенең татар сауҙагәре Мөхәмәт-Рәхимов Зәйетовҡа яҙҙырыуҙа заклад ҡағыҙын төҙөүҙә ҡатнаша.[123]

Ҡаранай ғүмеренең аҙағына тиклем буйһонмаҫ, ғорур рухлы булып ҡала. Өлкән йәшендә, Бөрйән олоҫоноң старшинаһы вазифаһында ла властарға күп мәшәкәт һәм тынғыһыҙлыҡ тыуҙыра. Ҡазан Йәшерен комиссияһынан иреккә сығарылғас, Өфө провинцияһы канцелярияһы Ҡаранай өҫтөнән йәшерен күҙәтеү булдыра. Ҡарт фетнәсенең тормош эшмәкәрлеге, йәйләү урындарын билдәләүе һәм йәйләүҙә күсеп йөрөүҙәре, ҡыҫҡаһы, Ҡаранайҙың һәр хәрәкәте Ырымбур генерал-губернаторына хәбәр ителеп тора. Ҡаранай иһә, буйһонмаусанлыҡ күрһәтеп, провинция канцелярияһы билдәләгән йәйләү сиктәрен туҡтауһыҙ боҙа. Быға ҡарата генерал-губернатор: «Ҡаранай тәғәйенләнгән йәйләү сиктәрен боҙһа боҙһон, тик губернаның тыныслығын боҙмаһын», — тип яуап бирергә мәжбүр була.[124]

## ИҪКӘРМӘЛӘР:

[1]Крестьянская война в России в 1773—1775 гг. Восстание Пугачева. М.; Л., 1966—1970. Т. II—III, Андрущенко А.И. Крестьянская война 1773—1775 гг. на Яике, в Приуралье, на Урале и в Сибири. М., 1969. 67, 77, 145-146, 300, 304, 306, 307-се бб.; Әсфәндиәров Ә.З. Пугачев полковниктары // Ағиҙел. 1973, №11; Шул уҡ автор. История сел и деревень. Т.2. Өфө, 1991, 144-се б.; Гвоздикова И.М. Салават Юлаев. Исследование документальных источников. Өфө, 1982; Шул уҡ автор. Башкортостан накануне и в годы Крестьянской войны под предводительством Е.И.Пугачева. Өфө, 1999; Таймасов С. Ҡаранай батыр // Ағиҙел. 1991, №5; Шул уҡ автор. Восстание 1773—1774 гг. в Башкортостане. Өфө, 2000.

[2]Алишев С.Х. Татары Среднего Поволжья в Пугачевском восстании. Ҡазан, 1973.

[3]Имамов Вахит. Татары в Пугачевском восстании. Яр Саллыһы, 1994. 455-456-сы бб.

[4]Асфандияров А.З. История сел и деревень. Т.2. 144-се б.; Таймасов С.У. Күрһ. хеҙм. 188-се б.

[5]Крестьянская война на территории Башкирии. Өфө, 1975; 152,156,163-сө бб. һ.б.; Материалы. Т. V.143, 235-се бб.; ГАОО. Ф. 3. Д. 148. Л. 45.

[6]Таймасов С.У. Ҡаранай батыр. 140-сы б.; Восстание Е.И.Пугачева. 188-се б.

[7]Материалы. Ч.1. 415-се б.

[8]Таймасов С. Күрһәт. хеҙм. 148-се б.

[9]Крестьянская война. 152-се б.

[10]Документы Ставки. 116, 146-сы бб.

[11]РГАДА. Ф. 6. Д. 416. Ч. 1. Л. 58; РГВИА. Ф. 20. Д. 1231. Л. 347; Документы Ставки Е.И. Пугачева. 116-сы б.

[12]Шунда уҡ. 146-сы б.

[13]Крестьянская война в России. Т. II. 210-сы б. Документтың иҫке төрки телендәге төп нөсхәһе: РГАДА. Ф. 6. Д. 416.Ч.2. Л. 56.

[14]Документы Ставки Е.И. Пугачева. 146-сы б.

[15]Ҡолбахтин Н.М. Күрһ. хеҙм. 54-се б.

[16]Алишев С.Х. Татары Среднего Поволжья в Пугачевском восстании. Ҡазан, 1973. 88-се б.

[17]Алишев С.Х. Күрһ. хеҙм. 99-100-се бб.

[18]Шунда уҡ.
[19]Документы Ставки. 379, 452-се бб.
[20]Шунда уҡ. 146-сы б.
[21]Документы Ставки. 146-сы б.
[22]Шунда уҡ. 305, 381, 392, 441-се бб.
[23]Шунда уҡ. 116-сы б.
[24]Алишев С.Х. Күрһ. хеҙм. 109, 111-се бб.
[25]Документы Ставки. 299-303-сө бб.
[26]Шунда уҡ. 418-се б.
[27]Шунда уҡ. 440-сы б.
[28]РГАДА. Ф. 1100. Кн. 5. Л. 68 об.
[29]Документы Ставки. 297-се б.
[30]Гвоздикова И.М. Башкортостан накануне и в годы Крестьянской войны под предводительством Е.И.Пугачева. Өфө, 1999. 347-се б.
[31]Воззвания и переписка вожаков Пугачевского восстания. Ҡазан, 1988. 87-се б. (Артабан — Воззвания).
[32]Крестьянская война. 72-73-сө бб.
[33]РГАДА. Ф. 6. Д. 416. Ч. 1. Л. 417; Документы Ставки. 148-149-сы бб.
[34]Шунда уҡ. Ф. 349. Д. 7304. Л. 7.
[35]Документы Ставки. С. 150, 418. Полковник Бибиковтың Зәй районында баш күтәреүселәр менән һуғыштары уның генерал-аншеф А.И. Бибиковҡа яҙған рапорттарында ентекле тасуирланған. РГВИА. Ф. 20. Д. 1232. Л. 44-46.
[36]Документы Ставки. 150-се б.
[37]Шунда уҡ. 418, 444-се б.; Алишев С.Х. Күрһ. хеҙм. 106-113-сө бб.
[38]Воззвания. 91-се б.
[39]РГВИА. Ф. 20. Д. 1235. Л. 199 и об.; Документы Ставки. 305, 441-се б.
[40]РГАДА. Ф. 6. Д. 416. Ч. 1. Л. 110-112 об.; Документы Ставки. 300-301, 444-се бб.
[41]Документы Ставки. 149-150, 418-се бб.
[42]Шунда уҡ. 152-се б.
[43]Шунда уҡ. 153, 419-сы бб.
[44]Шунда уҡ. 41, 1385-се б.
[45]Крестьянская война в России. Т. II. 234-236-сы бб.; Т. III. 25-се б., Андрущенко А.И. Күрһ. хеҙм. 145-147-се бб.
[46]Документы Ставки. 385-се б.; РГАДА. Ф. 6. Д. 431. Л. 30 об.
[47]Документы Ставки. 41-се б.; Овчинников Р.В. Манифесты и Указы Е.И. Пугачева. М., 1980. 87-88-се бб.
[48]Воззвания. 51-се б.
[49]Документы Ставки. 147-се б.
[50]Шунда уҡ. 298-299-сы бб.
[51]РГАДА. Ф. 349. Д. 7304. Л. 3 об. - 4 об.; Документы Ставки. 154-се б.
[52]Документы Ставки. 146-155-се бб.
[53]Крестьянская война в России. Т. II. 235-се б.
[54]Документы Ставки. 153-сө б.
[55]Шунда уҡ. 152, 153-сө бб.
[56]Крестьянская война. 79-сы б.
[57]Крестьянская война в России. Т. II. 235-се б.
[58]Шунда уҡ.
[59]Шунда уҡ. 236-сы б.
[60]Шунда уҡ. Т. III. 35-се б.
[61]РГАДА. Ф. 6. Д. 431. Л. 32 и об.
[62]Документы Ставки. 150-се б.
[63]Документы Ставки. 118-119-сы бб.
[64]РГВИА. Д. 20. Оп. 47. Д. 8. Л. 44 об.
[65]Крестьянская война. 127-се б.
[66]РГАДА. Ф.6. Д.507. Ч.5. Л.526 об.
[67]Крестьянская война. 127-се б.

[68]Документы Ставки. 368-се б.
[69]РГАДА. Ф. Д. 418. Л. 21-22; Документы Ставки. 314-315-се бб.
[70]Крестьянская война. 152-се б.
[71]Шунда уҡ.
[72]Шунда уҡ.
[73]Крестьянская война. 156-сы б.
[74]РГАДА. Ф. 6. Д. 592. Л. 432.
[75]Шунда уҡ. Л. 433.
[76]Шунда уҡ.
[77]Шунда уҡ. Д.597. Л. 529.
[78]РГАДА. Ф. 6. Д. 592.
[79]Крестьянская война. 163-сө б.
[80]Шунда уҡ. 164-165-се бб.
[81]РГВИА. Ф. 20. Д. 1239. Л. 42 об.
[82]Крестьянская война. 163-сө б.
[83]Шунда уҡ. 165-се б.
[84]РГАДА. Ф. 1100. Д.8. Л.17.
[85]РГАДА. Ф. 1100. Д.8. Л.17. 379-380-се бб.
[86]Шунда уҡ. Л.17 и об.; Крестьянская война. 380-се б.
[87]Крестьянская война. 170-171-се бб.
[88]Шунда уҡ. 178-179-сы бб.
[89]Шунда уҡ. 385-се б.
[90]Шунда уҡ. 199-сы б.
[91]РГАДА. Ф. 1100. Д.9. Л.376-377.
[92]Шунда уҡ. Л. 376.
[93]Крестьянская война. 202-203-сө бб.
[94]Шунда уҡ. 206-сы б.
[95]Крестьянская война. 206-сы б.
[96]Шунда уҡ. 205-208, 216-217-се бб.
[97]Шунда уҡ. 205-се б.
[98]Шунда уҡ. 207-се б.
[99]Крестьянская война. 207-се б.
[100]Документы Ставки. 336-сы б.
[101]Шунда уҡ. 342-се б.
[102]Шунда уҡ. 342-343-сө бб.
[103]Шунда уҡ. 448-се б.
[104]Воззвания. 181-се б.
[105]Крестьянская война. 222-се б.
[106]РГВИА. Ф.20. Д.1239. Л. 28 и об.
[107]Крестьянская война. 214-се б.
[108]РГВИА. Ф. 20. Д. 1239. Л. 28 и об.
[109]Крестьянская война. 225-се б.
[110]Шунда уҡ. 245-246-сы бб.
[111]Шунда уҡ. 247-се б.
[112]Крестьянская война. 247-се б.
[113]РГАДА. Ф. 6. Д. 489. Л. 171 об.
[114]Крестьянская война. 259-сы б.
[115]Шунда ук. 262-се б.
[116]РГАДА. Ф. 6. Д. 489. Л. 200 об
[117]РГАДА. Ф. 6. Д. 507. Ч. 3. Л.78.
[118]Шунда уҡ. Л. 39.
[119]Шунда уҡ. Д. 512. Ч.3. Л.4.
[120]РГАДА. Ф.6. Д. 507. Ч. III. Л. 89 и об. Крестьянская война. 273-274-се бб.
[121]Крестьянская война. 273-сө б.
[122]Материалы. Т.V. 143-сө б.
[123]Шунда уҡ. 235-се б.
[124]ГАОО. Ф.3. Оп.1. Д.149. Л.45.